Зөбәржәт Йәнбирҙина



# ИЛ ИНӘҺЕ



Зөбәржәт
Йәнбирҙина

# ИЛ ИНӘҺЕ

Үҙ библиоте-
каһына ихлас [illegible]
[illegible]
[illegible] күп сәләм
автор.

З. Й.

ӨФӨ
«КИТАП»
1995

ББК 84 Баш
Й 98

**Йәнбирҙина Зөбәржәт**

Й 98 Ил инәһе. — Өфө: «Китап», 1995. — 144 бит.

ISBN 5-295-01442-8

Шағирәнең был китабына ла хис-моңға бай, һутлы тел менән ижад ителгән әҫәрҙәре тупланды.

Й $\frac{4702110200-36}{121(03)-95}$ 49—95

ББК 84 Баш

ISBN 5-295-01442-8 © Йәнбирҙина Зөбәржәт, 1995



# ПОЭМАЛАР

*Саң-соң, саң-соң*
*Саңҡый йөрәккенәм —*
*Көнө-төнө, гүйә, саң*
*ҡаға.*
*Усым бешерерлек бүлкә*
*илем*
*Дағаланып баҫһын*
*донъяға.*

## ҺАНДАЛ

Ҡөттөм, көрәш аша
Ҡөтәм... Азатлыҡ та тигән
Ҡасан инде таң ата.
Йоҡлаһам да, халҡым, тиеп
Йөрәгем һыҙлап ята.

1.

Әллә ниндәй шомло тынлыҡ ине...
Өшәндереп йәнде, бар тәнде,
Әллә ҡайҙан афәт көттө йөрәк,
Дауыл ҡубыр төҫлө бер төндө.

Һорғолт төҫтә ине күл өҫтәре,
Борһаланып аҡты болоттар.
Йәшеренгән ҡоштар әллә ҡайҙа,
Йыл шикелле үтте минуттар.

Ағыулы ине һыуҙар, һулар һауа,
Зиһен тупаҫланып, аң шиңде.
Болоттарҙы ярып ҡояш баҡмай,
Төҫһөҙ атырға гел таң күнде.

Ҡайғы упҡынына осҡан йәнде
Ҡем бар ине тартып алырлыҡ?
Битарафлыҡ бөтә әйләнәлә,
Иҫең китеп һүнеп ҡалырлыҡ.

Әрнеүҙәрҙән тынıслана алмаҫ,
Ҡиҫелеүҙән тулар был йәнде,
Һүндерергә ҡыҙғанған мәл ине
Башҡортостан тигән донъямды.



2.

Инабаты бер ҙә күренмәй шул
Рәсәй ҙә генә тигән батшаның...
Рәсәй, Рәсәй, «халҡым» тигән булып
Батшалыҡты ҡабат башланың.

Түрен бирмәҫ тиле түрәләрҙән
Алйыған да халҡым ни ҡылһын!
Демократ тигәне дөмөккөрө,
Бюрократ тигәне суҡынһын!

Ил имгәге илле, йөҙ иллеһен
Һал инемә, илем, күтәрәм!
Тик имгәнгән илем, Башҡортостан,
Ергенәйең ҡалған түтәрәм!

Ай түтәрәм! Быуын-быуаттарҙы
Тарих итеп күҙҙән үткәрҙем.
Инәсәйҙән алып Иҙелгәсә
Таланыуҙа бөткән көс-кәрең.

Ер һатырға, имеш, заманында
Башҡорт ерен һатҡан, һаттырғандар...
Ерен талағандар, табан ялап,
Һатылмағандарҙы аттырғандар.

Төйәк кенә ере башҡортомдоң
Ус аяһы ҡалған Башҡортостан,
Бүленгәндә генә өлкәләрҙең
Төйәк кенә түре Башҡортостан.

3.

Ҡайҙа һинең өйөр-өйөр йылҡың?
Юҡ ителде күпме урман-ер.

Наполеонды туҡмап Париждарҙан
Ҡайта алған элек башҡорт-ир.

Ҡәйеф-сафа ҡорған ҡымыҙ менән
Араҡыны белмәҫ аҫыл ир.
Биш ҡатынға, утыҙ-ҡырҡ балаға
Ата була алған таһыл ир.

Йәндәремдең көйөктәре ҡалын,
Ҡаным күмһей, йәндән бәрә тир.
Һыу — ауырыу, ауырыу — һауа, ер,
Донъя тулы ауырыу, зәғиф ир.

* * *

Әллә ниндәй серле заман булған,
Төптәренә төшөп етмәҫлек.
Чехословакия, Афғанстан...
Тажикстан һуғышы тиктәҫкәме?

Уйҙы ғына тағы зиһенемде
«Армия» тип киткән ошо улдар.
«Тыныс ил» тип күпме ҡорбан булды,
Бәндәғолға хеҙмәт итеп ҡолдай.

Армия тип китә һөлөк кеүек,
Һылыуҙарҙан һылыу булғандары,
Ҡөслөләрҙән көслө, һау, уңғаны,
Ауырыуҙар бәғзе ҡалғандары.

4.

«Ҡайҙа һеҙ, ҡайҙа һеҙ,
Салауат тоҡомдары?»
Эҙләмәгеҙ, эҙләмәгеҙ, улар
Һаман башын һала батшаға.



Зәғифтәрҙән ниндәй тоҡом булһын,
Һау егеттәр кире ҡайтмаһа!

«Батырҙарса һәләк булды» тигән
Юлдарҙы кем уйлап тапты икән?
Ҡәберлектә — һүрәт, сабый күҙҙәр...
Ярҙам һорап кемгә баҡты икән?
Сыраҡтарын кемдәр япты икән?

Троллейбустарҙа ла шул һүрәттәр —
Миңә баҡҡан төҫлө, әрсәлә, тип,
Ғәрипләнә тоҡом, нәҫел-ырыу,
Хәл итмәҫлек юҡ та мәсьәлә, тип.

Аһ, был уйҙар, афған тауҙарында
Бәргеләнә төҫлө йөрәккенәм.
Тынсыу бурандарҙа борһаланам,
Таянырға юҡтай терәккенәм.

Тапҡандар бит, нисек баштар етеп,
Ҡоротоуҙың хәтәр әмәлдәрен!
Милләтемдең йәшәү тамырына
Балта сабыу тигән ғәмәлдәрен.

«Һин ирекле» тиеп, иман юйып,
Хәмер һемерттеләр башҡортома.
Алдырырға әмәл табыуҙары,
Бар тарихын утҡа яғыуҙары,
Аҙ булдымы ҡаза баш йортома.

5.

Табылған был әмәл — эскеселек —
Ҡыра һуғып тора тоҡомомдо.
Быуат быуа яҙҙыҡ, туҡтатырға
Яҙып ултырыуым хөкөмөмдө.

* * *

Имгәнгәндә илем Башҡортостан —
Ямаулығы Рәсәй-картаның.
Ямау итеп тартып торғас Рәсәй,
Барлауына баҫып торғас Рәсәй,
Уҙына алмайһың шул артығын.

Хоҙай үҙе атап төбәп биргән
Телгенәйең киҫте килмешәк.
Үҙ илеңдә ниңә үҙ һүҙең юҡ,
Ҡаушап ҡалдың әле һин ни эшләп?

Имгәнгәндә илем Башҡортостан,
Ни хәл генә итеп имләйем?
Еңеләйтер өсөн хәлгенәңде
Ниндәй ҡиәфәткә инәйем?

Сүрәкле лә уңған икмәкһең һин,
Бүлкәләп тә майлап һалынған.
Бер табала күркәм булмаһын, тип
Өлкәләргә бүлеп алынған.

Ай, түтәрәм! Устарымда ята —
Ус аяһы ғына Башҡортостан...
Усым бешә, бешһен, өтһөн әйҙә,
Талап алмаһындар ғына устан.

6.

Әллә ниндәй шомло заман ине
Өшәндергән йәнде, ғаләмде,
Әллә кемдән әллә ниҙәр көттөк,
Көтә-көтә көтөк булып бөттөк,
Көттөк бер сик ҡуйыр әҙәмде.



Яҙ шикелле үҙгәрерҙәй ине
Аяҡ-ҡулға бығау-торғонлоҡ.
Ямғыр көтөп, яумай, ҡыйратып та
Китер дауыл — килде бөлгөнлөк.

Партбилетын сәсерәтә һуҡҡас,
Ҡан сәсрәне йөрәк-билеттан.
Сәсем үрә тороп ап-аҡ булды
Был минутты мин һис онотмам!

Миллиондарҙың, партияның башын
Бер һелтәүҙә ҡыра һуҡһынсы!
Ҡурмәгәнбеҙ, халыҡ исеменән
Алдан әҙерләнгән упҡынды...

Ах, партиям! Һәләкәтең һәләк!
Үрләп алып түргә эш бөтмөр,
Ҡанлы ҡулдар менән эш бөтөрә
Ауыҙы ҡан килеш, дөмөккөр.

Йөҙҙәренән иман нуры ҡасҡан,
Табыналар, имеш аллаға.
Иҫем китеп, мейе кибеп сығыр,
Уйҙарымдан ҡабат килеп баҫам
«СССР» тигән картаға.

7.

Киҫәткәнең, әсәй, иҫкә төшә:
«Сын сынаяҡ Совет власы.
Сыңлап ҡына йәшәр ил төҙөнөк,
Коммунистар бик һаҡ булһасы!»

Ышанмаҫ та инең, әгәр һинә
Ҡайтып әйтһәм, һинең СССР
Тарҡалды ла тиеп, ышанмаҫлыҡ!
Өҙөлдө лә ҡуйҙы иҙге йыр.

Баш етмәҫлек заман; иләүенән туҙған
Һин төҙөгән СССР.
Ҡисер, әсәй, һаҡлай алмағанға,
Өҙөлдө лә ҡуйҙы изге сың!

Ураҡ менән сүкеш ҡосаҡлашып
Төшөп киттеме ни саң ҡағып!
Күҙҙәремдә йомдом шул минутта.
Ҡырт тешләнем телде, сайҡалып.

Уртымда ҡан, әләм төштө үрҙән,
Ҡанға урап сүкеш, ураҡты.
Ҡанды йотоп, телде тешләп торам —
Сәмреғош күкте уратты.

Белә микән халыҡ сәмреғоштоң
Ҡанатында ҡотҡо елпенгәнен?
Был афәттән бар тәбиғәт ҡурҡып,
Тауҙар, ерҙәр, һыуҙар һелкенгәнен?

8.

Миллионлы коммунистар ҡайҙа?!
Комсомолдар, ҡайҙа боҫтоғоҙ?
Күрәләтә һәләкәтлек килә,
Әйтелер һүҙ, ҡайҙа остоғоҙ?

Бер туғандай халыҡ белә микән
Нимә өсөн ҡылыс һурғанын?!
Кендек ҡаны тамған нигеҙ ташлап
Донъяларға ҡасаҡ тулғанын.

Ҡасаҡ халыҡ ҡайҙа ғына бармай,
Илкәйенән китеп, ҡыйырһып.
Аҡ биләүле бәпес йөкмәп ҡасҡан
Ҡырмыҫҡалар ғына тейерһең.



Эшсән халыҡ ҡанын көн-төн һурған
Бюрократтар — хәҙер демократ.
Хужа ҡайҙа, ҡайҙа етәксе тип,
Ҡорҙаштарға бағам нисә ҡат!

Һарыҡ итеп минең йән халҡымды
Ҡайҙа ҡыуа әле был тинтәк?
Ҡол хәленә төштөк, һаман-һаман
Һүҙһеҙ йәшәйбеҙ һуң беҙ нишләп?

Ҡан түкерә илдәр, донъяларҙа
Күпме йөрәктәрҙән ҡан тама.
Терәп атһалар ҙа йөрәгемдә
Яҡтылыҡҡа, бейеклеккә әйҙәп
Ураҡ менән сүкеш саң ҡаға.

9.

Әсәкәйем! Ҡәберлегеңдәмен...
Ҡаңаштәреңә мин бик мохтаж.
Утыҙ етеләге яҙмыштарға
Минең яҙмышым да бик оҡшаш.

Ҡисер, әсәй, килер бөлгөнлөктөң
Башы ғына ошо күренеш.
Һаҡһыҙ йөгөн минең партиямдың
Ауҙарҙы шул анау боролош.

Партвзносты түләп ҡайтып киләм,
Йөрәгемә һыҙылып ҡан һауа.
Уйлаған да һайын уйылдырып
Һорау булып бөтмәҫ һан яуа.

Һанай-һанай илдәр боролошон,
Ҡиләсәккә өмөт-уй һалам.
Һәр бер боролошҡа иблис кеүек

Яраҡлаша һалып йәшәп ятҡан
Ҡойто коммунистан оялам.

Уй, оялам, бөтә ғүмерең биргән
Әсәкәйем, һинән оялам.
Иҫке-моҫҡо кейеп йөрөп ятҡан
Сабыйҙарҙан бигерәк оялам.

Йылға йырған бала-сағаларҙың
Ығы-зығыһында ҡыялам.
Ныҡлы ил тотҡаһы булыр мәлдә
Ҡеҫһеҙләгәмдән мин оялам.

10.

Йөрәгемә ҡыҫтым ҡандай ҡыҙыл
Билетымды бөгөн нығыраҡ.
Яуҙаштарға бағам өмөт менән,
Бер шикләнәм, берсә икеләнәм,
Аптырағас, бағам һағыраҡ.

Партвзносты түләп ҡайтып киләм,
Ауыр уйҙы бүлеп яҙ килә.
Тәбиғәтте әйтәм, үс иткәндәй,
Йылғалары аға, яҙ көлә!

Партвзносты түләп киләм дә ул,
Йөрәк тәңгәлемә ҡыҫтырып.
Буш кәштәләр тора магазинда —
Аслыҡ килә илгә ҡысҡырып.

Тәбиғәтте нисек битәрләйһең,
Йөклө ҡатындар гел сиратта.
«Ил ҡайғыһын — ишле күтәрер» тип
Уйлай торғандарҙыр ир-ат та.



Ҡисермәҫһең инде мине, әсәй,
Ҡарап тороп илде ваттырҙыҡ.
Хәтәр заман килде, бөгәсә төн
Тыуыр таңды көскә аттырҙым.

Халҡым бойоҡ, тынысһыҙ был илдә
Мафиоздарында оят юҡ!
Көн-төн ҡойған һалҡын ямғырында
Ер күшеккән төҫлө, ҡояш юҡ.

11.

Партвзносты һуңғы тапҡыр түләп,
Партиҫәпте алып ҡайтып барам.
Уйҙарымдан, ҡанат һыныҡ килеш,
«Билдәһеҙлек» тигән юлды ярам.

Юлды ярам... табанымда таш бар,
Әллә ерҙән, әллә күктән барам.
Сырт һынғас ни хыял ҡанаттарым,
Әрнеп кенә бара йөрәк ярам.

Табанда таш, күңел тоташ ҡына
Үпкәләүҙән әрнеп тулышҡан.
Уйҙар сейләндергән был йәнемдең
Әрнеүенән быуыла һулыштар.

Билетымды ҡыҫып йөрәгемә,
Йота алмай ташты алҡымдан,
Күҙ яндырып сыҡҡан йәште түгеп,
Оялып та киләм халҡымдан.

Йән яндырып еткән намыҫымдың
Ғазабына батып киләм мин.
Һаҡ аҫтына алып горкомдарҙы,
Бүлешәләр иҙән келәмен.

Бүлешәләр, үлешәләр хатта,
Ҡойтолары һүҙһеҙ атыла.
Этаждарҙан ташлап үҙ-үҙҙәрен,
Сит илдәргә алтын һатыла.

12.

Бүлешәләр, үлешәләр инде,
Әҙәм тормай әйбер хаҡына.
Сит илдәргә баштар һатылалар,
Сит илдәргә ирҙәр һатыла.

Бүлешәләр, әҙәм башҡайҙарын
Ҡуялар хатта ерҙән һыҙып.
Тәхет бүлешәләр үлә яҙып,
Бер-беренә ҡәбер ҡаҙып.

Намыҫтарын этем ашағыры:
Ҡуйылмай бит һис бер шарты ла,
Ҡиләсәген утҡа бырағтырып,
Сит илдәргә ерҙәр һатыла,
Сит илдәргә илдәр һатыла.

Мин коммунист, —
Йәндәремә ятмай
Бөгөнгө аң, бөгөнгө саң.
Һыҙылдырып ҡына йөрәгемә
Һәр генә көн ата әрнеүле таң.

Йөрәгемә һаман нығыраҡ ҡыҫам
Утыҙ йыллыҡ ғорур билетты.
Туғарылған аттай ҡайтып киләм,
Намыҫтарым өтә был битте.

Алғы сафта илем булһын өсөн,
ЦК, әйтсе,
Сарыф көс ҡайҙа?



13.

Был баштарҙы ташҡа ороуҙарҙан
Ғәзиз илкәйемә ни файҙа?

Һинең өсөн бөткән һаулығыма
Дарыуҙарың ҡайҙа, ЦК, әйт!
Арыуҙарым бер ҙә ял алмаған
Ял йорттарың ҡайҙа, ЦК, әйт!

Донъялары бөгөн анархия,
Суҡынып китһен инде барыһы ла!
«Ленин юлы» тиеп, күҙҙе быуып
Ялған етәкләгән партия!

Сәсрәп китһен мин йәшәгән ғүмер,
Һыуға һалһам, балыҡ белмәҫме?!
Коммунизм — ярыҡ ялғаш алды —
Эштәремде халыҡ күрмәҫме?

* * *

Әллә ниндәй хәтәр заман тыуҙы,
Дауыл көткән төҫлө — сабырлыҡ.
Аралашып бөттө бер туғандар,
Күпме ғүмер кәрәк татыулыҡты,
Яҡшылыҡты ҡабат танырлыҡ!

Ер әйләнә, тыныс түгел күсәр,
Дөрләп яна карта — СССР!
Зыр әйләнгән саҡта осоп киткән
«Туғандаш ил» тигән изге йыр.

Зыр әйләнгән саҡта ер күсәрҙә
Рәсәй ҡалған туҡал һыйырҙай.
(Һыйыр туланиһә, аттан яман)
Ҡайҙарҙа көс тотоп тыйырҙай?

## 14.

Башҡортостан, туҡал Рәсәйның
Ҡорһағында ғына ямаулыҡ.
**Нисек әрсәләргә белмәй йәнем —**
Ҡыла күрмәһен, тип яманлыҡ.

Ығы-зығылы ла замана был,
Халҡым типкеләнә янъялда.
Был йөрәгем килер быуын өсөн
Даға сүкей төҫлө һандалда.

Сүкеш тотоп бармағымды иҙҙем,
Ул ваҡытым ине сабый саҡ.
Кәрәк-кәрәкмәгәнен ҡағып-һуҡтым,
Ул ваҡытым ине һантый саҡ.

Сәсеү өсөн аттар дағалаһа,
Ут күрекләп торҙом атайға.
Салғы сүкегәндә түш саңҡытып,
Һабын тотоп торҙом — янтайһа.

Ураҡ менән сүкеш ҡушылғанда
Филдәй терәк булдым мин үҙем.
Емерелде илем, ураҡ-сүкеш —
Ни хәл итәһең һуң, мин түҙҙем.

Бөгөн бына шул сүкештәй ҡурҡам,
Ниҙәр үтмәй әҙәм башынан.
Ғәзиз илем сәсрәп осмаһын, тим,
Мин уйнатҡан сүкеш аҫтынан.

## 15.

Күҙ алдыма килә, бала саҡта
Уйнағанда ғына бер уйын,



Ил яҙмышын шунда уйнағанбыҙ:
Иҫкә алһам, һеңгәҙәп тә китәм,
Йөрәгемә, йәнгә бик ҡыйын.

Аҡҡош булып осоп уйнаныҡ беҙ:
Өҫтә ҡоҙғон, аҫта упҡындыр.
Һаҡ булығыҙ, илгә ҡайтығыҙ, тип,
Оранының шаңдау саҡырыуы
Ишетелеп торҙо кемдеңдер.

Бөгөн килеп, бөлгән илде ҡондар
Терәткәндә упҡын ярына,
Емтек итеп тибеп алыр өсөн
Баш осонда ҡоҙғон ҡағына.

Нәфселәре меңҡоласлы ҡондар
Йә урманға, һыуға ташлана.
Әллә тимен, башҡорт сабырлығын
Һынай торған заман башлана?

Ирек даулап быуаттарҙы быуған
Башҡортостан, ғәзиз илгенәм!
Аҡҡоштарға һалған оран төҫлө,
Яҡташтарҙы тыным менән һурып
Ҡайтарырға етһә хәлгенәм,

Оран һалам бөгөн Бабичтарға,
Тыуыр Баһауҙарға саң ҡағам.
Аяуһыҙ был яуҙа көс йәлләмәҫ,
Ир-азаматтарға таң ҡалам.

«Ауыр саҡта тарҡалмағыҙ» тиеп,
Яуҙаштарға, килер быуынға,
Оран һалам тыуыр Салауатҡа,
Көрәш таңы тыуа тыуымға.

Был йөрәгем, көнөн-төнөн талмай,
Даға сүкей, яу булырлыҡ.
Дер һелкетеп башҡорт далаларын,
Бығауҙарҙы өҙә һуғырлыҡ.

Бына шундай хәтәр заманала
Усым бешә, уста — илгенәм.
Ус айһы ғына Башҡортостан,
Ҡотҡарырға етһә хәлгенәм.

Саҡ-соҡ, саҡ-соҡ саҡҡый йөрәккенәм —
Ҡөнө-төнө, гүйә, саҡ ҡаға.
Усым бешерерлек бүлкә илем
Дағаланып басһын донъяға.

Аямайым йәнде, саҡ-соҡ йөрәк
Урал ҡоросонан дағалар.
Өҙә тибеп ҡоллоҡ бығауҙарын,
Азатлыҡты бер көн доғалар!



## СТӘРЛЕ

«Пәшлек, — тиеп, бер ҡайынды
ҡосһам,
Кем һуң инде башҡа таш ҡаҙар?
Пәнкәй йәнәш булып батҡан
ерҙән
Мин янынан ҡалҡам, Ашҡаҙар».

*Р. Ғарипов*

1.

Өфөләргә китәм, кире ҡайтам.
«Ҡиттем», — тиеп китәм, гел ҡайтам.
«Ҡитергә», — тип уйлап өлгөрмәйем,
Һағыныуҙарымдан йән атам.

Эй Стәрлем, Стәрлекәйгенәм,
Ҡупергенәкәйең селтәрле.
Селтәр, селтәр инде минең йөрәк
Әрнеүҙәрем берәр бөтәрме?

Өфөләрҙән ҡайтҡан саҡтарымда
Стәрлекәйемдә күк томан.
«Һауа» тип һулайбыҙ газ монарын,
Таралып та бөтмәй бит һаман.

Эй Стәрлем, Стәрлекәйгенәм,
Ҡупергенәкәйеңдән үтеүе!
Йән биргәндәремдә ауыр булыр
Һине ташлап ҡына китеүе!

Эй, Стәрлем, ер кендегем булдың,
Тәҡдиребеҙ, ахыры, берүктән.
Ҡендек ҡаным һиңә таммаһа ла,
Яҙмышыбыҙ беҙҙең береккән.

2.

Заводтарҙы төҙөп ғорурландыҡ,
Торбаларға ҡарап һоҡландыҡ.
Ғүмер үтеп, алға барған һайын
Һәләкәткә килеп ҡапландыҡ.

Төтөн бөркөр торбаларың менән
Арбамағайның да йөрәкте.
Өс тағандай, өс бер туған кеүек,
Мөһабәт тауҙарың әүрәтте.

Күкрәгемә һин бит көсөн бирҙең
Шәке тауҙа осҡан бөркөттөң.
Заманалар ауыр, көслө бул, тип,
Иңдәремә ҡанат беркеттең.

Тау яҙмышы — кеше яҙмышылай,
Яуҙа ауҙы Шәке, Шаһ тауым,
Файҙаһы юҡ, һүрәтенә ҡарап,
Аптырауҙан телдәр сартлауҙың.

Эй, Стәрлем, ер кендегемһең шул,
Йығыламмы тиһәм — һин терәк.
Нисегерәк ҡурсаларға тиеп,
Селтәрләнеп әрней был йөрәк.

Ҡайтып киләм Шаһ тау итәгенән,
Шартлап осто Шәке — тигеҙ тау.
Тәгәрләп үк төшә һуңғы таштар...
Биленләгән Ҡуштау — игеҙтау.

3.

Яуҙан килгән ҡара хаттар кеүек
Осоп килгән таштар киҫәге.



Улын юйған әсә кеүек торам,
Тигеҙләнә тауҙың итәге.

Тертләп китте кеүек ошо хәлгә
Ғүмер буйы ҡазый — Ҡуштауым.
Биртенгәндә билдәреңдән тотоп,
Мин генәме тоям һыҡтауың?

Шартлап осто тағы, ах, ҡайһы тау?!
Өҙөлгәндәй минең йөрәк бау.
Торатауға килеп ҡул һалһалар,
Үҙ-үҙенә тороп ҡул һалырҙай —
Ҡисерә алмаҫ төҫлө Йөрәктау!

Сылбыр торна ҡайта икән тиһәм,
Шәке тауҙан ҡанат ҡуҙғалды.
Заманалар, ах был заманалар,
Йөрәгемә бөтмәҫ уй һалды...
Әкиәттә кеүек итеп күр ҙә,
Йәшә лә ҡуй икән донъяңды.

Эй, Стәрлем, анау торбаларҙан
Ҡайҙан сыға бөтмәҫ төтөнөң?
Крематорий мейесенә кереп,
Үҙем төтәгәндәй өтөлөп.

4.

Был заводтар бөгөн һөйөндөрмәй,
Дау күтәрәм, тағы тыйылам.
Һин хужаһы түгелме ни бөгөн,
Эшсе халыҡ, уйҙан уйылам.

Күрмәйһеңме, моңһоҙ аппаратсы,
Шкалаңдың уғы ҡағыуын?!
Сабыйҙарҙың бишегенә ятып,
Һин сығарған төтөн сағыуын?!

Күпергенәкәйҙәр селтәр, селтәр,
Йөрәгемә әрнеү өттөләр.
Өндәшмәнек, түҙҙек битарафҡа,
Тәҡәттәрем тамам бөттөләр.

Ҡурҡҡан булам, Торатауым ауһа,
Быуылыр, тип Иҙел ағышы.
Тауҙарһыҙ ҙа боғаҙынан алып,
Хәл итәләр Иҙел яҙмышын.

Ағиҙелкәйемдең матурлығын
Һыйпап ҡарай ҡояш — нур һуҙып.
Һыуҡайында моңдар, йырҙар аҡҡан
Иҙел башҡайынан ни уҙыр?

Ярһыуҙарың һинең туҡтар микән,
Ағиҙелем, шартлау, тертләүҙән.
Күҙ алдымда — быуылған да һыуың
Ҡырҙарымды баҫа, киртләүҙән.

5.

Йүкәләрем сәскә атмаҫ микән
Эшкә егеп уңған бал ҡортом?
Туғайымдан көтөү ҡайтмаҫ микән
Еленenә һалып май, ҡоротон?

Мейестәрҙән икмәк еҫен бөркөр
Игендәрем ҡырҙа шауламаҫ.
Һөргән ерҙә күперелеп бешкән
Ҡәбәндәрҙе малдар ауламаҫ.

Ҡанһыраған төҫлө һыу аҫтында
Ҡалыр микән инде ҡыр, ялан.
Ах, йөрәгем, туҡтап-туҡтап тибә,
Батып барған кеүек йән балам!



Селтәрләнеп әрней йөрәккәйем,
Һүрелеп тә барған күмерҙәй.
Ҡисеү бирмәҫ һыуҙар һайығалар
Һүнеп кенә барған ғүмерҙәй.

Иҙел буйы тотош бер фажиғә,
Ҡолаҡҡа ят хәҙер көйҙәре.
Нигеҙенә тәңкә күмеп һалған
Ҡоротола ауыл өйҙәре.

Ҡомалаҡтан әсеп бешкән икмәк —
Танауымда ине хуш еҫең.

6.

Химзаводтар ағыу бешерәләр,
Ҡешеләрҙең быуып аң-иҫен.

Ҡемдәр генә маҡтап йырламаны
Башҡортостан, һинең ҡояшты.
Ҡомағайҙар пәйҙә булғас ерҙә,
Ирек биргән һайын ул ташты.

Маҡтай-маҡтай ҡырҙы, тапанылар,
Маҡтай-маҡтай китте емереү.
Артын ҡарамаҫтан алға барған
Ҡомағайҙы баҫты һимереү.

«Мин»дәр донъяһының мин-минлеге
Миңрәүләтеп баҫа лепкәмә.
«Мин»дәргә мин була алмайһың, тип,
Тәбиғәтем баға үпкәләп.

Ер һелкетеп ракеталар осһа,
Ерем ҡала күҙен сырт йомоп.

Ғифрит оса, ете ҡатын күктең
Тишеп, осар көскә шарт ҡуйып.

Аҡылыңа, зиһенеңә, кешем,
Ҡылған эштәреңә мең ғәжәп!
Иҫ китеүҙән ерҙең үҙе төҫлө
Күп ваҡытта китәм һеңгәҙәп.

Уй етмәҫлек ҡитғаларға еттең,
Айға еттең, ҡайттың имен-һау.
Ахырзаман етте микән, тиеп,
Уй-хистәрем аса көн-төн дау.

7.

Стәрлекәй, йәнем әсегәндә
Ҡайғыларым китә ҡуҙғалып.
Ерем осоп китеп бармаһын, тип,
Озон тишкән ерҙән юл алып.

Аманатҡа ғына ҡалыр ергә,
Һыуға ҡағылһаҡсы һағыраҡ.
Бер осҡайын ерҙең туфан баҫһа —
Бер осонда ядро ярыла.

Ут менән һыу игеҙәктәр инде —
Уртаһына мәллә баҫайым.
Мөғжизәләр генә иле итеп
Еркәйемде ҡабат асайым.

Эй, Стәрлем, бәлки һин әйтерһең,
Ҡайһы тәңгәлеңдә йәйләйем?
Әллә инде һинең йәрәхәткә
Йөрәгемде ябып бәйләйем.

Мәләүездән башлап Ҡамағаса
Бер ыу булып аға май-дегет.
Ир уртаһы ике утыҙ инс,
Иллегә лә етмәй ир-егет.

Ғәмһеҙҙең бер йәнен терелтһәмсе,
Ҡулын ала алмай ҡашынан.
Ҡөмөш сылбыр торна ҡайтҡан саҡта
Ҡәпәскәйе төшһөн башынан.

Шихандарым һәр саҡ һаҡта торһон,
Ҡайтыр әле, бәлки, торналар.
Ағиҙелдә сабаҡ ҡарпып китер,
Төтәмәһен генә торбалар.

8.

Гүзәллеген минең Стәрлемдең
Йыумаһын һыу, туҙан баҫмаһын.
Сабыйҙарҙың зәңгәр бишегенә
Ыулы сымылдығын аҫмаһын.

Рухтарымды нығыт һин, Стәрлем,
Ҡөсөн биреп ҡалған тау-таштың.
Мин халҡыма өндәшәйем әле,
Шаңдауҙары етһен тауыштың.

Һәр тарафҡа етһен саҡырыуым,
Рухым менән шаңдау ҡауышһын.
Оранымды ишет әле, халҡым,
Ярҙам ҡулы булһын тауышың!

Фажиғәле яҙмыш көткән ерҙә,
Уян әле, халҡым, ҡурсалап.
Башкиҫәрҙәр беҙгә һиҙҙермәйсә
Ағиҙелгә, илгә ҡул һала.

Гөрләп кенә үҫһен аҡ ҡайындар,
Уйсан аҡһын, әйҙә, Ашҡаҙар.
Йәнкәй йәнәш, тиеп, шағир ҡалҡһа,
Башҡайына кем һуң таш ҡаҙар?

## НИҘЕР БИРЕП БӨТӨРМӘНЕҢ ҺЫМАҠ

«Әй, балам, балаҡайым!..» Әйтер
һүҙҙәр
Әйтеп бөтмәнеңме әллә, әсәй?
Әйтер һүҙҙәреңде үҙең менән алып
Киттеңме, тип, йөрәккенәм сәсәй!

Йылдар буйы ете төндәремдә
Ете торғанға ла,
Күпһенмәйем һинең йүргәгеңде
Ете йыуғанға ла.
Көндәремдә һинең янда
Әйтер һүҙең көтөп,
Ваҡытымдың тарлығынан
Йөрәгемде өтөп,
Һаҡта торғанға ла...
Әсәкәйем!
Өҙөлгәндәй булды кинәт
Китеп барған юлым!
Һуңғы һулышыңды алғас,
Ҡаплап донъя нурын,
Күҙҙәреңә һалдым
Ҡалтыранған ҡулым.
Күҙ алдымдан бер-бер артлы үтә
Һуңғы минуттарың.
Белмәнек беҙ, һин дә, мин дә,
Күпме ғүмер барын.
«Зөбәржәтем», — тиеп саҡырҙың да
Текләп әйттең: «Балам, балам,
Мин бит һиңә ниндәй ҡыйын
Ауырлыҡтар һалам...»
Сеү, әсәйем, ниндәй һүҙ был?
Үлсәү һыймай уйға ғына.
Тормош итмәй һис бер хөрмәт,
Минең өсөн һин кисергән
Һыңар тулғағыңа!



* * *

Ҡышҡы селлә, алмас йәштәремдән
Таштар сатнар төçлө.
Әйтеп киткән һуңғы һүҙҙәреңдең
Мәғәнәһе көслө!
«Балам... балам...
Мин бит һиңә ауырлыҡтар һалам!»
Ауырлыҡтар һалмаç өсөн генә
Китеп барҙың микән?
Имеҙгән дә һөтөң хаҡын
Түләй алдым микән?..
Алмас йәштәр телеүенән
Сатнап барма, сикәм.
Ҡәберлектә һин дә мин — беҙ,
Йыраҡ түгел ара.
Ҡолағымда ҡалды әйткән һүҙең.
Ниҙер бирәп бөтөрмәнек һымаҡ,
Мәғәнәһе йөрәк түремдә.
Бешкән ашым тороп ҡалғандай.
«Балам, балам, ауырлыҡтар һалам» —
Ҡылыр эштәремдән артта ҡалып
Ҡояшҡынам байып барғандай.

Риза булсы, әсәй, мине бағып,
Күҙҙәреңдән түккән нурҙарға.
Хеҙмәттәрем, хөрмәттәрем аҙҙыр —
Мохтаж түгелһең һин ҙурлауға.
Күкрәк һөткәйеңдең баһаһы ҙур,
Һүҙҙәр етмәç инде ҙурларға?
«Балам... балам!..
Һиңә төшкән бөтә ауырлыҡты
Нисек кенә еңеләйтә алам?» —
Сыңлай һаман йөрәк түремдә.
«Балам, балам, донъя һиңә ҡала...»
Ауаз килгән кеүек гүреңдән!

Ҡолағымда ҡалды әйткән һүҙең,
Мәғәнәһе йөрәк түремдә.
«Балам, балам, ауырлыҡтар һалам,
Илдең йөгө һинең иңеңдә», —
Шулай тинең һуңғы көнөңдә.

Бөтә ғүмерең килә күҙ алдыма —
Эш һөйөүсән гәүһәр ҡулдарың.
Күпме аҡыл һинән миңә ҡалды
Йомолғанда сыраҡ-нурҙарың.

Йырың сыңлай: «Тормош сын быяла
Һаҡһыҙ тотоноп та ватмағыҙ.
Совет иле бит ул — күҙ ҡараһы,
Ҡәҙерҙәрен белеп һаҡлағыҙ!»

Түңкәрелеп китә донъяларым
Ышанманыңмы әллә һин, әсәй?!
«Илде һаҡла» тиеп киҫәткәнең,
Йөрәгемде уйҙар киҫкеләй!

Телде, илде миңә мираҫ итеп,
Һаҡла, тиеп киттең, меңйәшәр?
Ауырлыҡтар һалам... Кинйә һүҙ —
Мөһөр булып миндә гел йәшәр.
...Рәшәткәңдең тимере лә
Йылы икән, әсәй?
Йәшәүемә өмөтләндерер көс
Хәҙер бында йәшәй.

Һанһыҙ рәхмәт әйтә килдең геләң,
Ҡемгә әйттең икән?
Яҡты донъяғалыр, моғайын.
Сабый төҫлө йәштәремде һөртөп,
Күмеп киттем,
Балалыҡтың алтын туғайын.



## ТӘҮБӘЛӘРГӘ ҠАЙТТЫМ

«Сабыр төпкәйҙәре — һары алтын» —
Ҡемдәр шулай йырлаған икән?
Сабыр итә-итә йәрен көтөп,
Йәштәр түгеп илаған микән?

Ҡайҙан ғына, ҡасан йәргенәһен
Башҡорт ҡатындары көтмәгән,
«Сабыр төпкәйҙәре — һары алтын» —
Өмөттәрҙән мәхрүм итмәгән.

Һағыныуҙар ауыр, көтөү ауыр,
Түҙсе, йөрәк, бер аҙ, бул сабыр.
Һағынып та, өҙөлөп көтөп алыр
Йәрең булмау ерҙә — мең ауыр!

Ҡайҙан ғына, ҡасан йәргенәһен
Ер йөҙөндә көтмәй ҡатындар!
Был донъяла сабыр булғандарҙың
Йәргә, ергә, илгә хаҡы бар.

Йәмшәйер, тип баҫырға ла йәлләп
Торам әле йәшел үләнеңә.
Ҡәкүккәйем, кисер, ғүмер һанап
Саҡырғанда ҡапыл бүлгәнемә?

Әй, һандуғас, инде тын да алмай,
Ҡөтөп торам һайрап тыныуыңды.
Уйҙарымдың төпһөҙ ҡыуағында,
Теләмәйем, теләмәйем, ҡошом,
Был тормошта үҙем аҙашҡандай,
Аҙашып та ғына ҡалыуыңды.

Хистәр — диңгеҙ, хәтирәләр — тулҡын
Үткән дә генә йылдар — аҡҡан һыуҙа
Үтеп киткән йылдарымды ҡыҫып
Яҡынайтһам, бөгөн шаулап-гөрләп
Үтеп кенә бара төҫлө туйҙар.

Аһ, арыным, йәнем, һине көтөп,
Онотолоп ҡына китәм ҡай саҡ.
Йәшлек үҙе кире ҡайтыр төҫлө,
Бар ғүмерем усҡа ғына һыйып,
Төшкән еркәйемә кире ҡайтһаҡ.

* * *

Алмағас һәм муйыл сәскә атҡан,
Аҡтан-пактан күлдәк кейгәндәр.
Эй мөхәббәт, ҡурғаш иретерлек
Ҡөс-ялҡынды һиңә биргәндәр.

Ҡолаҡ япрағымды ялҡын өтә, —
Иренемдә ҡайнар һулышың,
Иҫтәремдән яҙып биреләмен,
Һиңә бирәм бөтә булмышым.

Мин табынған Алла күктә түгел,
Минең Аллам ерҙә, һин, йәнем,
Тормош-хаятыма көс өҫтәүсе,
Йәм өҫтәүсе бары бер йәнһең..

Балын һыта баҫҡан кәрәҙең мин —
Татлы тормош биҙәр юлыңда!
Иң бәхетле кәләш мин генәлер,
Иреп кенә төшәм ҡулыңда...

Рәхәт тә ул ҡайны, ҡәйнәле йорт,
Оло йортта шатбыҙ, иркәбеҙ.
Тәфсирләп тә ҡарттар эш өйрәтһә,
Етдиләнгән булып китәбеҙ.

Асылында өйөрҙәге тайҙар:
Сабып, уйнап үтә көнөбөҙ,
Эшкә барып, эштән ҡайтып керһәк
Йырлап ҡына торҙо өйөбөҙ.

Бәхетлеләр инек, сәскә аттыҡ,
Алмағас та, муйыл шикелле.
Түл төйнәнем, үҙем шыр бер ҡатлы,
Ап-аҡ йөҙөм тутлы, һипкелле.

Аш төрләп тә һиңә биҙәләнам,
Балтырғанға киттек, урманға.
Ике йәш муйылды ҡаҙып алдың,
Ҡауышыуға булһын, тип, тамға.

Аҡ сәскәле муйыл, ҡара емеш...
Ҡара емеш, ҡара күмерҙәй.
Пар ҡайынды ниңә ултыртманыҡ?
«Емешһеҙ» тип мәллә ғәйепләнек,
Емеш бирмәҫ зая ғүмерҙәй.

Иҫеңдәме, йәнем, икебеҙҙең
(Йөрәгебеҙ хатта туҡтала!)
Сабыйыбыҙға бит йән кергәйне
Икебеҙҙең генә уртала.



Заказ 801

Изгеләрҙән изге мәл ошолор,
Бәхет тапмам башҡа ишенән!
Ҡан ҡытыҡлап, иҫтәренде алып,
Ҡеше ярала бит кешенән!

Шатлығымдан ҡосағына ауҙым:
Донъя киттеме ни түңкәрелеп!
Ә һин шунда, хәс тә бәпес итеп,
Икебеҙҙе алдың күтәреп.

Эштән ҡайтҡан ирем ихатала
Йорт эштәрен йөрөй атҡарып.
Түр бүлмәлә, ул-киленен йом(о)шап
Маһир ултыралар ҡарттарым.

Ҡайны-ҡарттар — күгәрсендәрме ни!
Алмағастар гүйә сәскәлә.
Ҡөнләшерлек инде тиң ғүмергә.
Ярты быуат тигеҙ йәшә лә —
Нихәл шулай йәшнәп йәшәмә?!

Тиң йөрәктәр генә ана шулай
Ғүмер һөрөп, айыл быуалыр:
Мөхәббәттең сафы һәм олоһо
Ғүмер иткән һайын тыуалыр.

Ҡулдарымдан сүмес төшә яҙҙы,
«Һиңә әйтәм», — тигәс иргенәм.
«Атайҙарҙың иғтибарын бүлмә,
Хәҙер, йәнем, хәҙер, бергенәм!» —
Ҡаймаҡ һалып, айран туғып бирҙем,
«Һыуһындарың ҡандыр, сеүгенәм!»

Хыялдарҙан урап, уйҙар ҡорҙом,
Донъя ҡорҙоҡ, донъя ураттыҡ.
Йорт һалғанда, көмөш дурт тәнкәне
«Нигеҙ ҡото» тиеп ураттыҡ.
«Үҙебеҙгә түгел, быуыныбыҙға
Етерлек», — тип бура бураттыҡ.

Ҡайным инде, ейән көтөп, күптән
Йышып-юнып бишек яһаған;
Ҡәйнәм тыуыр вариҫыбыҙ өсөн
Ике матур исем һайлаған.

Өйөбөҙгә керҙек, яҡты, йылы,
Шөкөр, тинек, тормош көрләккә.
Итәк тулы бала үҫһен, тиеп,
Һиртмә ҡаҡтың, йәнем, өрләккә.

Ҡайны-ҡәйнәм ихлас доға ҡылды,
Икебеҙгә биреп фатиха.
Тигеҙ ғүмер, аҡ сәс, һары тешле
Ҡартлыҡ теләнеләр... Яҙмышыбыҙ
Буласағын белмәй фажиғә...

* * *

Ап-аҡтан, пак-сафтан күлдәге —
Шау сәскә баҡсала алмағас;
Ҡырауҙан ҡойола сәскәләр,
Бер таңда тәбиғәт алдағас.

Хыянат, хыянат, хыянат!
Тумалған түлдәрең ҡорорлоҡ!
Өҙөлгән үҙәкте өҙҙөрөп,
Баш бирмәй яфалай ғорурлыҡ.

Ҡисереү мөмкинме?! Йәнемдән
Айырып ташлайым үҙ йәнем.
Өҙөлөп һөйгәнде — һөймәҫкә,
Һөйөргә лә етмәй выжданым.

Ап-аҡтан, пак-сафтан көлдәге —
Шау сәскә баҡсала алмағас.
Сәскәләй ҡойола хистәрем,
Өҙөлөп һөйгәнем алдағас.

Йөрәгемдә һөйөү — гөл бәйләме,
Сәскәләрен киҫтең гөлдәрҙең һин.
Көнәлһеҙе булдың ғүмеремдә
Гөрләп кенә йәшәр көндәремдең.

Барыһы ла, барыһы ла көйә,
Сей иткенәм тәндә дөрләп янмай,
Сабыйыма күпме «әү» тим, «сеү» тим,
Ярһып илауынан һис тә тынмай.

Ҡайһығыҙҙың баҙнаттары етте
Туҙҙырырға ҡоштоң ояларын?
Ҡипкән телдәремдән төкөрөк бүлеп
Һуғарам мин ҡоштоң балаларын...

Ҡайһы оятһыҙы иҙрәп йоҡлай
Мин биләгән йәрҙең ҡуйынында?
Йәр ҙә һиңә булаһы юҡ бит ул,
Юлдашың да булмаҫ ул юлында.

Ҡайһы оятһыҙы иҙрәп йоҡлай,
Минең сабыйымды буҫыҡтырып?
Яҙмыш менән кемдәр шулай уйнай,
Тормошомдо мәртҡә юҫыҡтырып?

Алйыным да үҙем, албырғаным,
Таралғанда инде тамыр-ҡаным;
Түҙҙем, инде башҡа түҙә алмам,
Көйә лә генә, өтөлә лә йәнем.



Диуаналар иттең, диуаналар,
Дәрүишме мин, тағы сығып китәм,
Иртә таңдарымда өҙөлөп көтәм,
Һағыштарҙан үргән толом һүтәм.

Һүтәм дә мин, моңдарыма мансып,
Төндәремдә теҙәм аҡыҡ-мәрйен;
Ҡәрәкмәй ҙә инде мең кәңәштәр,
Ярһыуҙары ҡайтты күңелдәрҙең.

* * *

Мең аҡыллы йоҙаҡ менән биклә п,
Тыйып ҡуям ярһыу йөрәгемде.
«Балаң өсөн йәшә, тормошоңда
Юғалтып та ҡуйма терәгеңде!..»
Ауаздарын тоям йөрәгемдең.

Сеү әле, сеү, иламасы, балам,
Хәҙер һиңә сөсө икмәк һалам;
Үҙем һаман һине уйлап янам,
Ерҙә барлығыңдан миҙәт алам.

Күңелһеҙҙең көлдәккәйе туҙмай,
Йоҡоһоҙға төн дә бик тиҙ уҙмай;
Һәүкәш һауһам, күнәккәйем тулмай,
Ҡайғылының икмәккәйе уңмай.

Уңмағанға сыҡтым инде, иркәм,
Ҡитәм инде, ҡайтмам микән бүтән?..
Гөрләп килгән яҙҙы хәйерлегә
Юрауҙары бына ошо икән.

Безәүкәйем, төртмәсе һөт һорап,
Уйым китте йәрем менән ураП.
«Һин юҡ» тиеп берәү килеп әйтһә,

Тәүбә!!!
Уй хоҙайым! Юкка торам юрап.

Тиши-тиши, каймда тауыктарым?
Мунса уҙған, йылы саф һыуҙарым.
Яйлап һүнгән мунса ташы кеүек,
Һыуынамы йөрәк ярһыуҙарым?

Тик бер генә сергә ғүмер буйы
Төшөнмәйем дә мин, төшөнмәм дә:
«Йәр табылды», — тиеп йәшәй микән
Яҙмыш һыуығында өшөгәндәр.

Көндәшемә бирер һорауҙарым
Йөрәгемдә ғүмер буйы бора.
Йәр бирмәгем — йән бирмәгем, кырау
Араларға өҫтәлә лә тора.

Таң алдында һине «һөйәм» тиеп,
Минең йәрем өҙөлөп алдағанда,
Им(е)сәгең һинең сәнсмәй инде,
Минең балам ярһып илағанда.

Түлләмәйсә муйыл сәскә коя,
Нисек кайтарайым дауылдарын?!
Һылыу килен, уңған килен булып
Таң калдырғайным да ауылдарын...

Китәм һинән, кисер мине, йәнем,
Ғәрлек-йәштән керпектәрем көйгән.
Һөйөү-нәфрәт капма-каршы, береһе
Кара курғаш, береһе бакыр икән.

Түнәрәтеп донъя көтәһеңдер...
Бәрәкалла, бирһен һиңә хоҙай!



Үҙ йәремде көнләшмә әле, көндәш,
Арағыҙға керер уй юк улай.

Түнәрәтеп көткән донъяғыҙҙа
Һандуғастар тешен кайрағанда,
Сакты эҙләгән Сук — йөрәк тауышым
Сағылалыр әле арағыҙҙа!

Һыҙылып кына тағы кояш сыға,
Һөтлө күнәк тотоп күккә бағам;
Хәҙер иламай ҙа күҙкәйҙәрем,
Әрнеү булып ғүмер генә аға.

Кәһәрҙәрем төшһөн уйнашсыға
Йәнде өҙөп, муйыл сәскә ата.
Көтәсәккә алған минең йәрем
Бурыс булып куйынында ята.

* * *

Уйҙар, уйҙар... сумдым тағы тәрән,
Уй янында диңгеҙ тубыктан.
Бар хистәрем аяуһыҙ был ерҙең
Һынауынан мәллә сыныккан.

«Ташлама һин уны, ташлама», — тип
Эҙәрлекләй кайным тауышкайы.
Ир йөрөмәҫ катын уңмағандан,
Зарарлы ла ир-ат яҙмышкайы.

«Үҙ колонон бейә ситкә типмәҫ,
Ситкә типкәндә лә өҙә типмәҫ», —
Эй, кайным-карт, туктаталманың шул,
Ғорурлыктан кеше калай итмәҫ.

Ғанләләрҙе боҙған уйнашсыға,
Ҡайҙа яза, илдең ағалары?!
Урталайға ярылыр был йәндәргә
Ҡемдәр табыр икән дауаларын?

Үҫте ҡыҙым, шатлыҡ ташыр мәлдә
Күңелдәрҙә һағыш, әрнеүҙәр,
Үткән ғүмер иҫкә төшһә ҡабат,
Ҡайтып ҡына ҡуя мәреүҙәр...

Алма нимә, бүлһәң, бүленә лә
Һыңар алма етә биш йәнгә,
Ҡалтыранып, йөҙөм сләгеп дә
Бүләһең һин, беҙгә, өс йәнгә.

Һинең ҡулдан ҡыҙым ем алманы...
Хыянаттан ауыр был ҡылыҡ!
Етемлеккә балаң үпкәләгән,
Хәҡиҡәткә була ни ҡылып?!

«Атаң биргәс, алсы, балам», — тиеп,
Ҡөслап эйҙерәмен башҡынаһын.
Ҡайҙан белһен тәмен етем бала,
Атай көсө, атай ашҡынаһын.

* * *

Уттан ҡыҙыу уйнаш ирҙәй ирҙе
Ниндәй хәлдәргә һуң төшөрмәй.
Мин кисерәм дә ул һөйгән өсөн,
Хаталарың ҡыҙың кисермәй.

«Һис кисермәм», — тинем, кисерҙем дә
(Башҡайыма тәүбәм төшөрҙөм).
Унһыҙ инде янған йөрәгемде
Мин яңынан өттөм, бешерҙем.



Ҡайттым... Бына минең төшкән йортом...
Тертләп киттем, ауыр күңелгә.
Болоҡһойҙор беҙ ултыртҡан муйыл,
«Ҡауышҡайныгыҙ, — тип, — ғүмергә».

Еллап киткән төҫлө булды шул саҡ
Йортом алды, ауыл урамы.
Бөтәһе лә элеккеләй торған,
Бөтәһе лә хәлем һораны.

Шишмәлеккә йүгереп барғым килде,
Өҙөлөп һағынғанмын, үлерлек!
Тик мин хәҙер йәш-елкенсәк түгел,
Шуға күрә бер аҙ түҙерлек.

Ирәүәнләп элек килен булған
Йорт алдына сығам йәшенеп,
Күршеләрҙән бер аҙ тартындыра,
Элегерәк инде йәш инек.

«Минлеккә» тип ҡайынлыҡҡа барҙым.
Минлек инде — бары тик һылтау;
Йәндәремде өҙөп, бер туҡтауһыҙ
Ҡысҡыра ла шул саҡ Ҡыҙғатау.

«Итәк тулы балаларың ҡайҙа?..
Ҡыҙғатау, ҡыҙым алтау... ғат-тау!»
«Беҙҙең, — тинем, — итәк тулы түгел,
Яңғыҙ бер ҡыҙ ғына, Ҡыҙғатау...»

«Абау, абау!»
Урмандарҙа тағы иҫем китте
Тәгәрәшеп үлгән ҡайындарға,
Бер миҙгелдә оҡшап китте улар
Сабырлығын юйған ҡатындарға.

Юл буйында түгелеп ҡайын илай,
Ҡайһы яуыз балта сапҡан?
Һандуғастар ҡунып һайрар мәлдә,
Гөрләп кенә шаулап үҫер саҡта?..

Аҡ күлдәкле ҡайын башҡайына
Ҡайғы килер тиеп кемдәр белгән.
Бар тәненә һырғалап йәш аға,
Йәрәхәтләп йәштәр кемдәр элгән?

Тупраҡ һылап ҡайын яраһына,
Яулығымды бәйләп ҡарайыммы?
Минең йәрәхәтте кемдәр бәйләр,
Имәнлеккә генә барайыммы?

Имәнлегем, һауғынаһыңмы, тим,
Серҙәреңде бүлеш аҙыраҡ?
Ир ҡорона һин тулышҡан һайын,
Күңелкәйем никтер наҙлыраҡ.

Ғүмер үткән, бушҡа үтмәгән дә,
Үткән ғүмер барыбер йәл була,
Ахырында үткәндәрҙе барлап,
Һынау тотоп алыр мәл була.

Иҫеңдәме, минең ҡайны ҡартым
Һиндә биргән ине кәңәшен:
«Ҡисер уны, килен, онот барын,
Ул бит һинең һөйгән йәнәшең».

«Ғорур булдым, ғорур ҡалайым» тип,
Тыңламаным, киттем, ташланым.
Имәнлегем, һин генәһең шаһит —
Яҙмышымды яңынан башланым.



«Яңылыштың шул», — тип телгә килде,
Шаулап китеп бөтә имәнлек;
«Ғүмер буйы онота алмаҫ был, — тип, —
Китмә», — тиеп күпме инәлдек.

Шишмәлектән урап йөрөп ҡайттым,
Һайыҡҡан да шишмә һыуҙары;
Тәүбәләргә күңел ҡайтты ла ул,
Ҡайтмай ғүмер — йәшлек йылдары.

* * *

Оло туҫтаҡ ҡаймаҡ ҡуйҙы бейем,
Ҡәрәҙле бал — күрке бал ҡорттоң.
Сәй эсәбеҙ, өҙөлөп йөрәк һыҙлай:
Мин ҡунағы бары был йорттоң.

Беҙ ҡауышҡан бүлмә... кереп яттым,
Бишек-ҡаҙау — һаман өрлөктә;
Ғүмер үткән һағыштарға түҙеп,
Сыҙай алмай китеп ғәрлеккә.

Онотолор өсөн салҡан яттым,
Күҙҙәр илай, үкһей күңелем.
Тунған бармаҡтарҙай йөрәк һыҙлай,
Әрнеүҙәргә сабыр күнегеп.

Күҙҙәр тулы — йәштәр, кире шикә,
Күңел тулы үкһеү — һеңәләр.
Сәстәр ҡыҫҡа, аҡыл оҙайҙы ла,
Тик сәстәрҙә — ап-аҡ энәләр.

Ғорурлыҡ та тигән бейек тауға
Ҡөслө йәндәр генә менәләр,
Тик усаҡтар ундай бейеклектә,
Тоҡандырам тиһәң — һүнәләр...

Ир ҡәҙерен белмәҫ дыуамаллыҡ!
Сабырһыҙлыҡ төҫмө ҡатын-ҡыҙға?!
Ил-инәләй илаһилыҡ һалыр
Аҡылыңды барла, ҡаның ҡыҙһа.

Беҙ яҙмышты икәү аҡламаныҡ,
Һөйөүҙе лә икәү һаҡламаныҡ.
Хыянат иткәнбеҙ йәшлеккә беҙ,
Шуға ҡороғандыр йәншишмәбеҙ.

Ҡыйралған да ҡайынлыҡмы ғүмер?
Тәбиғәттеңдәме юҡ тэрәге?
Донъя тулы ғәрип сауҡалыҡтай
Етемдәрҙән һыҙа ил йөрәге.

Ғаиләләрҙе тотор сабыр сатыр
Ҡатындарҙан икән ер йөҙөндә.
Эй, тәбиғәт, аяныслы яҙмыш,
Оло бурыс тоям мин үҙемдә...





# ШИҒЫРҘАР

*Был донъяла йәшәү үҙе*
*шатлыҡ,*
*Кеше ғүмере моңло*
*йыр һымаҡ.*



* * *

Дуҫың әйткән бер хаҡһыҙ һүҙ
Төш аралаш илата.
Йоҡлаһам да, халҡым, тиеп
Был йөрәк һыҙлап ята.

### БАШҠОРТОСТАНДЫҢ СУВЕРЕНИТЕТЫН ЮЛЛАҒАН

Аяҡ терәп, күҙ төбәгән ереҥ,
Хыянаттан әрнеп тетрәгәндә,
Уйыла ер, туйындыра тороп,
Иманына кешем килмәгәнгә.

Ер ниғмәтен һурып, ҡуйынына
Тоҙло һыуҙы күрҙем ҡойғандарын.
Тамырҙарын дымһындыра алмай,
Тәгәрәшеп үлә ҡайындарым.

Быйылғы йыл, ирҙәр иңен ишеп,
Ауырлыкты тағы һалыр микән?
Күрсе, ана, ярты ҡышҡа хәтле
Япраҡтарын түгә һалмай имән.

Донъяларҙа ҡауға, ҡауға, ҡауға,
Баҫа алмай ваҡыт-туташҡай ҙа.



Инәй тыйған кеүек, балаларын
Тыйып тотор аҡыл-көсө ҡайҙа?

Башҡортостан, йәйеп кенә осҡан
Ҡанаттарың киҫә кемдәр, кемдәр?
Аш атҡанға таш атмағайның да,
«Үҙеңдеке үҙеңә яу» тиҙәр.

Башҡортостан, йәндәреңде кемдәр
Беләм дә бит, өткән, көйҙөргәнен,
Үҙеңдеке үҙеңә яу булып
Әсе-әсе телдәр тейҙергәнен...

Инә ҡоштай һаҡлап, яҡлап киләм —
Өтөлөп тә бөткән был йәндәрем.
Азатлығың өсөн түҙеп киләм,
Тетелеп тә бөткән был тәндәрем.

Минең намыҫ хыянатсы булһа
Ғәфү итмәҫ затым, илем дә.
Шуға ла бит әсә һөтө тәмен
Тоям һәр саҡ туған телемдә!

### САҠЫРЫУЫМ ЯҢЫ КӨРӘШКӘ

Тәңкә ташлап әүәл, шишмәләргә
Намаҙ уҡығандар инәйҙәр.
Выжданһыҙҙар бөгөн эсәр һыуҙы
Фенол һалып ҡына емләйҙәр.

Швейцария, йәки Болгария —
Тип тиңләүгә әллә күҙ тейҙе.
Башҡортостан, гүзәл Башҡортостан,
Йәнем көйөү етмәй, күҙ көйҙө.

Дары мискәһе бит Башҡортостан!
Уйлап, уйылып та ҡот осҡан.
Беҙ булырбыҙ микән ҡанатһыҙ ҙа
Иң беренсе булып күккә осҡан?

Сүплек соҡорона әйләнгәнбеҙ,
Ғәфләттәрҙән ойоп, берауыҡ.
Бал, май, елегендә һурып
Иткәндәр бит бер оло зауыҡ!

Ғүмер буйы «Ағиҙелкәй» тиеп
Һоҡландым да — бөгөн һыҡтанам.
Ағиҙелдең аҡ һыуҙарын яңылыш
Эсеп ҡуймаҫ өсөн һаҡланам.

Намаҙ уҡып, көмөш тәңкә ташлап
Аҡ инәйҙәр генә хаж ҡылған,
Шишмәләрҙе әллә ҡоротҡанға
Ҡәһәрҙәре беҙгә тартылған?

Ҡылған эштең ҡырын ҡырлаларын
Ҡырҡ йылдан һуң раҫлап, күҙемсә,
Йәшәйештең яҙыҡ эшкәйҙәрен
Төшөндөрә мәллә үҙенсә.

Яуапһыҙҙар өсөн яза ҡайҙа?
Нәфрәт йәйәһенән уҡ атам.
Баш-баштаҡлығыңды, Химпром хан,
Ҙур яһаҡтар һалып туҡтатам.

Фашистан да бикәр Химпром хан,
Ниндәй көс табайым язаңа.
Табипсы ла, шәфҡәт туташы ла
Ҡосһоҙ хәҙер һинең ҡазаңа.



Һәр юлымда йәнем һыҙланыуы,
Башҡортостан, уян, тор, йәшнә!
Иман шарты булһын һәр бер һүҙем —
Саҡырыуым яңы көрәшкә.

## ЗӘҢГӘР ЙӘШМӘЛӘРГӘ ТАҢ ҠАЛЫП...

Аҙ ултырыр ҡунаҡ, күп һынар, тип
Тыя ине әсәй, ят барҙа.
Ваҡлыҡтар ҙа оло булып күҙгә
Ташланалыр йыраҡ яҡтарҙа.

Ҡөмәҙләүле алтын сәллә урап,
Күк терәгән, сиркәү түбәләре.
Яҙмаһыҙ ҙа ете яттар таный,
Ҡыҙыл майҙан ята түгәрәлеп.

Метроларға төшәм, түшәм-түбә
Әкиәтме ни, бөгөл-көймәле.
Баҫҡыстарын әйт һин, баҫҡысына
Аяҡ өҫтө баҫһаң, эймәле!

Иҙән, стеналар көллө мәрмәр!
Таштар күргәҙмәһе — тамаша!
Аяҡ баҫҡан һайын, һығылып китеп,
Уралдыңмы хәлен һораша?

Уралымдың әрһеҙ мәрмәрҙәрен
Әйләнеп тә сыҡтым, ҡыҙырып.
Хажға барыр инем, тыуған яҡтың
Ғәмһеҙлеген алһа һыпырып!

Селтәрле лә суйын күперҙәре,
Ихаталар суйын, Уралдан.
Их, һатҡандар башҡорт байлыҡтарын—

Уйлаһаң бик ҡыйын, бөтә уйым,
КПСС, һинә уралған.

Сит яҡтарҙың күперҙәре суйын,
Мираҫылыр беҙҙең яҡтарҙың.
Стәрлемдә күпер гөрҫләп һына
Күтәрә алмай, кисерә алмай ғына
Ғәмһеҙлеген беҙҙең ирҙәрҙең!

Их, һаталар миҙал тағып балын
Ит, майы ла бында яталар.
Башҡортостанымдың туҥрағын да
Тоҡсайҙарға һалып һаталар.

Талайҙар бит! Һаҡлар, яҡлар кем бар
Ватылмаҫтан элек сүлмәкте?
Үҙ Уралым йүкәһенән үреп,
Тартынмаҫтар, тура әйткән өсөн,
Элергә лә, хатта, элмәкте.

Башҡортостан, һинән ситкә сыҡһам,
Йөрәккенәм бөтә өтөлөп.
Гүзәл һарайҙарҙы биҙәр йәшмә,
Үҙеңдә һуң бармы, бөртөгө?

Мәскәү — Мәккә. Шау мәрмәрҙәр тап
Хаҡлыҡ юллай микән ғәм халыҡ?
Ҡайтып киттем, тик мираҫҡа ҡалған
Зәңгәр йәшмәләргә таң ҡалып.

## АРҠА ҺӨЙӘГЕМ ҺИН, ХАЛҠЫМ

Тарих... тарих... Һинең юлдарыңда
Мөғжизәләр, мәхшәр сәселгән.
Һине һүтһәм, уйҙан йәшен уты
Сытырҙатып өтә сәсемдән.



Һәҙиә Дәүләтшина...
Туҡтай йөрәк,
Иҫкә алғандай ҙа тын ҡалып.
Ҡабат тулай, һис кенә лә тынмай,
Әрнер йөрәктәргә ут һалып.

Эште ташлап аяҡ үрә баҫам,
Йөрәк тулай, китәм сайҡалып.
Яҙыусылар, ил йөрәге тулай,
Үткәндәрҙе, һеҙҙе иҫкә алып.

Сабый сағым... Сталинға «атай»
Тигән саҡҡа йөрәк яна бит!
Шул ваҡытта хаҡһыҙ ялғанлыҡҡа
Дусар булған Төхфәт Йәнәби.

Шулай инде, аттың яҡшылары
Бәйгеләрҙә сабып яналар.
Бәйгеләрҙә уҙыр ат булғанға
Юлтыйҙы ла тотоп ябалар.

Башкиҫәрҙәр үҙ баштарын һаҡлап,
Булат ҡылыс кеүек булғанға,
«Халыҡ дошманы» тип Ишемғолға
Һуғылған да ҡуйған был тамға.

Эй замана, ни эшләнең икән?
Белмәй тороп эштең асылын,
Иле өсөн йәнен-тәнен биргән
Шул уҡ тамға алған Насыри.

Дәүләтшинде, тағы Амантайҙы
Кем күрһәтте икән «дошман» тип?
Эй кешеләр, ышанғанһығыҙҙыр...
Дошман һәр саҡ йәнгә ҡуштан бит.

Болондарҙың аҫыл сәскәләрен
Өҙгән кеүек, киткән кешеләр.
Донъяла ла өҙөп алынған гөл
Һәҙиә апай, Ғөбәй ишеләр.

Эй ҡорбандар, һанай-һанай китһәң,
Сатнай башым, йөрәк туҡтала.
Ҡабат тулай, һис кенә лә тынмай
Тын торам мин — халҡым иҫкә ала.

Хаталарҙы, эх, төҙәтеп булһа,
Тик заманды ғына ҡәһәрләп!
Гөлдәр кеүек, сәскә атҡас ҡына
Баштар осоп төшкән тәгәрләп.

Һәләк ҡурҡыныс та йән икән ул
Был донъяла әҙәм аҡтығы.
Һин халҡыңды яҡлап тура баҫһаң,
Йөрәгеңә тоҫҡай мылтығын.

Дошманыма тиңһеҙ көрәшемдә
Бөтөп китә ҡалһа көс-ялҡын,
«Арҡа һөйәгем» тип һөйәлермен
Һыуға таяндырма һин, халҡым!

## АДЛЕР — НОВОСИБИРСК, НОВОСИБИРСК — А...

Еллән-еллән килеп ямғыр яуа,
Борһаланып аға Аҡ бура.
Тыуған яҡҡа моңһоу баҡҡан күҙҙәр
Илап ебәрмәйсә саҡ тора.

Ах, тыуған ер, Башҡортостанҡайым!
Ялҡынланып яна бер осоң.
Мин янамын үрһәләнеп ситтә
Ҡайтып етер хәл юҡ бит осоп.



Урмандарым, кешеләрем яна,
Ҡорт-ҡырмыҫҡа яна, шауҙырлап.
Ҡешеләрем, балаларым ғәзиз,
Һәләк булды кемдәр ҡауҙырлап?

Нимә булып китте донъяларға,
Арта ғына бара бәләһе.
Ғәмһеҙләндек артыҡ, алдандыҡмы,
Туҡлыҡ-көрлөк, тиеп, йәнәһе.

Нимә булды һуң был донъяларға?
Итәгенә бик йыш ут ҡаба.
Салғыйыма ут тоҡанған кеүек,
Баҫҡан ерем, гүйә, ут-таба,
Донъя тигән донъям Ут таһа.

## ДЕБЕТ ШӘЛЕМ

Шәл бәйләйем, дүрт мөйөшө
Әйтерһең дә, дүрт яҡ-ҡибла.
Ҡемгә насип, шул йылыныр,
Ҡемгә насип, шул ябына.

Дебет шәлем, күпереп тора,
Һалдым күңел йылыларым.
Берәмтекләп күҙ алғанда
Ҡушылдылар күҙ нурҙарым.

Ҡинәнеп тә ябынһындар,
Таныштарым, дуҫ-иштәрем.
«Баш йылыһы балтырҙа» тип
Эҙләп килһендәр иштәрен.

Зыңғырҙатып сиртҡән саҡта
Саған орсоҡ бер көй көйләй:

— Бармаҡтарың орсоғоңа
«Дуҫлыҡ» тигән епте иләй.
Бармаҡтарым дебет иләй.

Елкенә лә күңелкәйем,
Өҙөлмәҫ еп, орсоҡ сиртәм.
Башҡортостан дебет шәлен
Нурлы-йырлы дуҫлыҡ итәм.

Ошо уйҙан дәрт өҫтәлә,
Ҡулда тағы эш йәнләнә.
Орсоҡ түгел, дуҫлыҡ ебен
Урап, гүйә, ер әйләнә,
Ер әйләнә, ер әйләнә.

## ЭЙӘРЛӘЙЕК АТТЫ, ТУҒАНЫМ

Туған менән туған талашһа,
Ат эйәрләп менһә, яраша.
Эйәрләйек атты, туғаным,
Һыбай йөрөргә мин һыуһаным.

Милләт менән милләт талашһа,
Ашъяулығын түшәп яраша.
Алдарына теҙеп аш-һыуҙы
Саҡырайым милләт-ырыуҙы.

Рәсәй уртаһында табыным,
Изге ниәт — яҙған хат башым.
Башҡортостаныма борһондар
Үҙ күреүсе дуҫтар ат башын.

Дине, теле уртаҡ туғандар,
Рухы менән уртаҡ булғандар,
Юлын борһон әйҙә был яҡҡа,
Ат эйәрләп килһен ҡунаҡҡа.



Башҡортостан — Рәсәй уртаһы,
Ҡанды йотайыҡ та урттағы,
Бир ҡулыңды, рухи туғаным,
Һыбай йөрөргә мин һыуһаным.

## КҮКБОҘ

Тауҙар күргәҙмәһен күреп кенә
Өлгөрә алмай күҙҙәр сәсәйҙәр.
Хоҙайҙы әйтәм, моғайын да, үҙе
Ҡавказ тауҙарында йәшәйҙер.
Һыуы гәүһәр, ере хазиналыр,
«Ожмахтыр» тип, ҡолап төшөрһөң.
Ҡыпсаҡтарым бында йәшәгәс ни,
«Сит ил» тип ниңә йән өшәнһен.
Бер үк бында тау, ер атамаһы,
Йәмәғәт тау, йыйын майҙаны.
Оло инә, кесе инә тауын
«Йөрәктау» тип күңел һайланы.
«Бүретамаҡ» шарлауығын бында
Үҙҙәренсә атай урыҫтар.
Күкбоҙҙо ла «Ҡавказ», «Пятигорск» тип
Исемләй ҙә һалып Биштауымды,
Йөрөтәләр икән, ҡырыҫтар!
Аптырап та киттем, Бейекбоҙом
Ошоғаса «Ҡазбек» булғанға!
Күкбоҙ, Уралымдың бит һин
Кесе туғанҡайы булғанға.
«Ҡарасәйҙәр ҡайҙан хасил булған?»
Юламанға бирәм һорауҙы.
«Типчак» тигән халыҡ булған» — ти ул,
Ҡыпсаҡты ла русса әйләндереп,
Талап итә бит был юрауҙы.
Илле йылдан ил була шул, беләм,
Беҙ булмабыҙ инде ул саҡта.

Килер быуын белһен, Күкбоҙҙағы
Талanғандан юҡҡа сығарылған
Аҫабалы бөйөк ҡыпсаҡты.
Бөтә донъя таланыуҙан тора,
Етмәнеме икән һуң беҙҙән?!
Таланған ҡыҙ кеүек битәрләнеп,
Уралыма ҡайттым Күкбоҙҙан.

## МИЛӘШ ҺИРТМӘ

Яһайымсы, ғәзиз ерем, һиңә,
Миләш һиртмә, һөйән сәңгелдәк.
Икһеҙ-сикһеҙ йыһан һиртмәндә һин
Тирбәл әйҙә, миңә сәм өҫтәп.
Ҡурҡыныслы хәүеф-хафаларҙы
Торайымсы ситкә тибәреп.
Булмаһынсы кәйеф ҡырыусы ла
Матурлыҡтың йәмен ебәреп.
Тик бар әле ҡаныҡҡандар һиңә
Һуғып төшөрөргә һиртмәңдән.
Ҡерфек һөҙөп бәбәк ҡаҡмай бағам
Йөрәк өшөп бөткән тертләүҙән.
Ергенәйем, үҙ һөйәгемһең бит,
Сабый төҫлө алып беләккә,
Ышанысла бишеккенәң итеп,
Һалып тирбәтәйем йөрәккә.
Йөрәгемде итә алһам һиңә
Миләш һиртмә, һөйән сәңгелдәк,
Бер ус тупраҡ булып ябылырмын
Яраң һыҙлағанда һеңкелдәп.

## БАШАҠ

Ҡирә ҡарыш башлы арыш
Дәррәү күтәрелгәндә,



Һәр береһе һалдат төҫлө,
Сафҡа баҫып килгәндәй.

Тубырсыҡ быуындары ла
Бар һынау үткән кеүек.
Алтын тулҡын, һушты алып,
Йөрәккә күскән кеүек.

Шул тулҡындан башаҡ ыуҙым,
Ғәзиз ерем — усымда.
Изгенән дә изге илем
Ҡото бөртөк тосонда.

Әсе тирем тамған еркәй
Бүләк иткән тостарым.
Бөртөктәр наҙынан иҙрәй
Һөйәлләнгән устарым.

## ҠАЙҺЫ ЯҠТЫҢ БАШҠОРТО ҺИН, ҺЫЛЫУ?

Ҡайһы яҡтың башҡорто һин, һылыу? —
рау бирҙе шулай бер апай,
Бигерәк инде тәмләп һөйләшәһең,
нотманың телде һин ҡалай?
элде нисек оноталар икән,
аңғып торҙом бер аҙ, бер талай.

шо телдә тәүләп «әсәй» тинем,
л һынлы ил һыя йөрәккә.
өйгәнемә «һөйәм» тиеп әйттем,
Балам» һүҙе яҡын бигерәк тә.

өйөргәҙе буйы башҡорто мин,
йҙай битле башҡорт апайым.
сә һөтө менән кермәгәнгә,

Туған теле булып шытып сығыр,
Орлоҡ-һүҙҙе ҡайҙан табайым?!

Ҡаҙлайырҙың һыуын эсеп үҫтем —
Ҡендек ҡаным тамған еремдә.
«Хур итмә» тип ауылдаштар ҡалды
Ҡашҡа тауға менгән үремдә.

Олатайҙар кеүек, сабыр ғына
Ырыуыма юрап бар ҡотом,
Өстүбәлә күҙәтәлер төҫлө
Ҡыпсағымдың ҡошо, бөркөтөм.

«Тап төшөрмә йөҙгә, балам»— тиеп
Инәй кеүек баға ҡарама.
Тараҡ-тамға һалып, нәҫел-ырыу
Тоҙ һибеп тә бәйләй ярама.

Яҙыҡлыҡтан еңгәйҙәрем көлөр,
Улар бигерәк сая, шуҡ таһа!
Аҙашмаҫҡа юлдарымдан, алдан
Оран биреп саба Туҡсаба.

азагы 47 се битте.

### ҠОРОП ЕБӘРӘЙЕМ ТИРМӘЛӘР

Ҡит инде, кит, бәй ҙә тота алмаҫ,
Сит яҡтарҙа туған, дуҫ-иштәр.
Тыуған яҡты һағынып һөйләүемдән,
Ҡойолорҙар инде был тештәр.

Үҫмәһен дә алма-хөрмәләре,
Ҡаҙлайырҙың талын һағындым.
Ҡунаҡлыҡтың өс көнлөгө яҡшы,
«Ҡайтам» тигән һүҙҙән ҡабындым.



Ҡамалып та бөткән диуарҙарға
Тарығыуҙан бөттө тындарым.
Һағынып та тыуған яҡҡа еләм,
Ҡаршылаһын алһыу таңдарым.

Апһаны ла күңел берсә аҡҡан,
Берсә кипкән арыҡ-үҙәндән.
Минең күңел гелән шаулап аҡҡан
Ағиҙелкәйемә өйрәнгән.

Ҡуй инде, ҡуй, тик бар булһын, әйҙә,
Йөҙөм, емеш, еләк, хөрмәләр.
Мин даламды һағынып ҡайтып киләм—
Ҡороп ебәрерҙәй тирмәләр.

### ҠАҘЛАЙЫРЫМ

Ҡаҙлайырым ҡамыштары,
Күңелем һағыштары.
Күкрәк киреп ҡаршы ала
Ҡашҡа тауым, таштарым.

Ҡаҙлайырым — ҡамышлы һыу
Өйрәктәр ебәрергә.
Тулҡын ҡулдарына ятып
Тағы бер тирбәлергә!

Мәте тайғалаҡлы ярҙа
Һаман шыуамдыр кеүек.
Ҡаҙлайырым һағыштарға
Гелән китәһең күмеп.

Ҡаҙлайырым, наҙлы йырым,
Балыҡ тотҡан бала саҡ.
Дингеҙҙә йөҙгән саҡта-ла
Күңелемдә ҡаласаҡ.

## АУЫЛЫМ ҠУНАҠБАЙ

Ҡунаҡбай — Молоҡан
Саҡырым юл, өҙәрем.
Был юлды йәйәүләп
Сыңыҡты бөгәрем.

Ҡунаҡбай — Молоҡан,
Мәктәбем, төйәгем.
Тау үрләп сыныҡты
Бил-арҡа һөйәгем.

Ҡунаҡбай — Стәрле,
Саҡрымдар, өҙәрем.
Һаман һин, ауылым,
Эстәрҙе өҙәрһең.

Ҡунаҡбай — Стәрле,
Оҙон юл, өҙәрем.
Ауылым, йылдарға
Һағышты теҙәрмен.

Ғүмерҙең юлында
Аҙымдар нығына.
Йөрәгем һаман да
«Ауыл» тип һығыла.

## ТЫН ТЫҢЛАЙЫМ

Йөрәгемде усҡа ҡыҫып тотоп
Ергә ятып мин тын тыңлайым.
Һулҡылдап та ерҙең йөрәккәйе
Әллә ниҙәр әйттe моңайып.

«...Тәнем янһа дауа табыр инең,
Йәнем яна, йәнем, үлтереп...»



Баш осомдан реактивтар осто
Көслө тауыш менән, үкереп.

Еркәйемә ныҕыраҡ йәбештем мин,
Дауам итеп һаман һөйләшәм.
Ҡаңәшләшәм үткәндәре менән,
Киләсәккә үрелеп өндәшәм.

...Күтәрҙе лә һуҡты көслө тулҡын,
Әллә инде бомба ярылды?..
«Сырт» иткәнгә үлән, күҙем астым —
Бер ҡарында бәпес яралды!

Һыйпап ҡуйҙым ерҙе яткан килеш,
Түл тамырым сиртә кендектә.
Бар булмышым уйға бикләнгән дә
«Ерҙе һаҡлап ҡал, — ти, — нисек тә!»

Тын тыңлайым, ерҙең арьяғында
Ҡайһылыр йән илай, һыу һорап.
Бер уртлам һыу уртлап йүгерерҙәймен,
Экваторҙы буйлап, ер урап!

Ауырыу заман! Йәшел япраҡтарым,
Йәшел ҡөләм булып төрөлгән.
Көйгән ергә бер ус тупраҡ услап,
Мин бит инде ул, тороп йүгергән!

Ауырыу заман! Ауырыйҙар бөгөн,
Ил ауырый, ауырый һыу, һауа...
Ләйсән яуа, тиеп йүгереп сыҡһам,
Чернобылдан килеп ыу яуа.

Тын тыңлайым. Ҡасандыр күк тәңрем
Тамсыларын йыйып күл иткән.
Донъя бөткәс, донъя яралтырға
Бер ус тупраҡ еткән, түл еткән.

Хафаларҙан һикереп тороп баҫтым —
Йөрәгемде ҡыҫып уң уҫҡа.
Һомай ҡулағаһе ябайыммы,
Тәҡдиремде ялғап яҙмышҡа?

Ерҙе, һыуҙы, түлде — барын бергә
Йөрәгемә һалдым, ныҡ төйнәп.
Һәр осраҡта әҙер баҫып торам,
Реактивтар оса ут төтәп.

**АХ, БЫЛ ДОНЪЯ!**

Ғүмер үтеп бара һине һағынып,
Йырҙар һуҙам ҡышҡы кистәрен.
Тыуған яҡтың һағыштарын баҫмай
Мәтрүшкә сәй, әрем еҫтәре.

Тик һөйәктән генә өй һалырға
Ант иткән эт, ҡышын асыҡҡас.
Имен-аман булһа донъяларым,
Ауылыма ҡайтам, яҙ сыҡҡас.

Ҡиблаларға ҡарап Ҡашҡа тауҙан
Ауылымды байҡар күҙҙәрем.
Шиғыр-йырға төрөр туғайҙарҙы
Йөрәгемдән сыҡҡан һүҙҙәрем.

Ах, был донъя! Ҡалай алдаҡсы һин,
Үтеп бара бына йәйҙәрем.
«Һүтелмәһен» тиеп тотоп киләм,
Был донъяның ебен, бәйҙәрен.

Ах, был донъя, бөтмәҫ мәшәҡәтең,
Ҡай тоҡсайға һалып аҫайым?



Дәфтәр менән ҡәләм генә алып
Болоҡҡамы ултырып ҡасайым?

Ах, был донъя! Ҡалай алдаҡсы һин,
Үтте бына тағы йәйҙәрем.
«Һүтелмәһен» тимен был донъяның
Өҙөлөп тә барған бәйҙәрен.

**ҠАБАЛАНА ЗАМАН**

Пассажирҙар теҙелмәһе үтә,
Проводниктар үтә күрешеп.
Дуҫлыҡтары, тимен, ярылып ята —
Алышырҙар ине үбешеп.

Состав бара. Ҡиткән йылы уҫҡа
Ус һуғып та ҡала күп устар.
Ҡөр тауыштар яңғырашып китте,
Күңелләнеп ҡалды күп дуҫтар.

Беҙҙең поезд «китергә» тип ана,
Һыҙғыртты ла ҡуйҙы ҡуҙғалып.
Проводниктар тупһаларға баҫҡан
Һары флажоктарын ҡулға алып.

Ҡурешергә, һөйләшергә ваҡыт
Ҡасан етер әҙәм затына?
Ҡабалана кеше, атланған да
Замананың тимер атына.

Ҡабалана заман, ҡабалана,
Тотонған да атом ялына.
Туҡта, ерем! Ҡаҙ үләнкәйеңдә
Бер сәй эсәйексе яй ғына?!

## ЙӨРӘК ОСА

Байконурға юлым төшөп,
Тюра-тамда баҫып торам.
Ерҙән үҙен күтәрҙе лә
Осоп китте күккә «Буран».

Йөрәгемдә усҡа ҡыҫып,
Күккә баҡтым — сикһеҙ ғаләм.
Ракетанан елберләп тә
Ҡалды кеүек ялҡын-әләм.

Ракеталар оса күктә
Йондоҙ буйлап, ғаләм буйлап.
Аһ, был донъя — ахыры заман,
Ауыр заман, торам уйлап.

Матур заман, аңлы заман,
Яңылышмаһын ғына кешем!
Ярҙамыма мохтаж булһаң,
Йүгереп киләм, ташлап эшем.

Ғифрит кеүек ялҡын кәүҙә —
«Буран»ымды ғаләм ҡоса.
«Буран» түгел, йыһан буйлап,
Ахыры, минең йөрәк оса.

Әйтерһең, мин «Буран» менән
Заман ағыштарын борам.
Илем менән уртаҡ уйҙы
Яҡшылыҡҡа юрап торам.



## АҢЛАМАЙЫМ СЕРЕН ТӨҘӨЛӨШТӨҢ

Елле-елле таҡталарҙы ҡағып,
Төҙөлөшкә урын ҡамайҙар.
Ең һыҙғанып эшләп йөрөй бында
Әзмәүерҙәй ирҙәр — ағайҙар.

Тик был төҙөлөштө аңламайым —
Бейек ҡойма, күҙең күрмәле;
Бер үткенсе әйтте моңһоу ғына,
Ҙурайталар, тиеп, төрмәне.

Гонаһлылар инде юҡ та кеүек,
Ниңә кәрәк икән таш һарай?
Хистәремде, уйҙарымды бүлеп,
Ҡуштирәктә өҙөлөп ҡош һайрай.

## НИМӘ ҺУҢ БЫЛ!

Нимә һуң был? Бер ташландыҡ ауыл,
Кәберлектәр саҡ-саҡ билдәле...
Йәйрәп ята ялан, ҡыр, туғайлыҡ —
Тай-тулаҡтар уйнап китмәле.

Нимә, тиһәм, бында күл булғандыр...
Зәғиф кенә ҡамыш буй һуҙған.
Пар аҡҡоштар бәлки йөҙгәндәрҙер
Аҡҡош юлы булып моң уҙған.

Нимә һуң был? Аяҡ баҫҡан ерҙән
Шишмә сыға уртлап-бөркөлөп.
Бойҙай сәсһәм бынау түмәләскә,
Тирбәлерҙәр ине эркелеп.

Иген үҫер ерҙе сәнскәк баҫҡан;
Күгәрешеп киткән әремдәр.

Йөрәк һыҙлай... үҙен туйындырған
Ғәзиз ерен ташлай әҙәмдәр.

Ниндәй заман һуң был? Ғәзиз ерҙәр
Күңелемә хафа сәсәләр.
Шатлыҡ итеп төрөп алып ҡайтыр
Йән сабыйын ташлай әсәләр.

Ояларға ҡыр ҡаҙҙары ҡайтмай,
Бөтә ғәйепме һуң ҡаҙҙарҙа?
Иген иккән ауыл егеттәрен,
Яңғыҙ итә бөгөн ҡыҙҙар ҙа.

«Ахыры заман» —тиһәм бороло ҙа
Бер әйләнер әле яҡшыға.
Ҡотһоҙлоҡтан заман юлын бороп,
Ал бирмәһен инде, шаҡшыға.

Ерҙе айҡар, тереклекте байҡар,
Ҡайҙа киткән минең тиң-тоштар?
Хәлен белгәс килеп был төбәктең
Моңһоу ғына осто аҡҡоштар...

## ЭЙ БЫЛ ҒҮМЕР...

«Ат — баҫмам да, ир — бармам да» тигә
Ерҙә торам әле ҡабаттан.
Һыу тапмаһам тағы, тау үрендә
Үкендермәҫ микән аҙаҡтан?

Ҡараңғыла ҡунған ҡунмаҫ ҡош мин, —
Тағы ҡунам инде сараһыҙ.
Эй, һин яҙмыш! Мин бәндәңде әллә
Йәшәмәһен, тиһең, яраһыҙ.

## ИЛ ИНӘҺЕ

Биләүесен тибеп асып
Йүгереп киткән сабый сағым.
Сабыйлыҡтан ҡасыр өсөн
Сәсте ҡырҡҡан һантый сағым.

Һантыйлыҡты йәшерергә
Толом үргән һылыу сағым.
Һылыуҙарҙан тағы һылыу —
Ҡиленсәк тә булыу сағым.

Ҡиленлектән әсә итте
Ир терәге булыр сағым.
Ир терәге— ил терәге,
Ил йөрәге булыр сағым.

Дүрт миҙгелгә оҡшаш ғүмер
Тәҡдиремдә быуын быуа.
Хыялымда ил инәһе
Был донъяға илап тыуған
Бер сабыйҙың битен йыуа.

## ТОҘАҠ

Телеңде алыр өсөн әйткән һүҙҙән
Сереңде алдым һурып,
Бер генә теш ярам, тигән һүҙҙән
Башты ярҙым ороп,
Юҡ-бар хәйлә ҡороп.

Ах, был донъя, ах, был донъя,
Ҡире булмай бороп.
Ҡөтәһеңдер ҡайһы бороло шта,
Тоҙағыңды ҡороп.



3*

## ҠУЛДАРЫМДАН ҠАЙСАҠ ӘЙБЕР ТӨШӘ

Ҡулдарымдан ҡайсаҡ әйбер төшә
Ебегәнлекме был, бешмәгән!
Энә күҙен күрмәҫ булды күҙҙәр,
Күҙләр ейәндәрем үҫмәгән.

Һыу һеңдергән быйма кейгән кеүек
Ауырая бара аяҡтар.
Ҡасан ғына алһыу сафлыҡ бөркһә,
Соҡорая бара яңаҡтар.

Өшөп кенә китә йөрәккәйем,
Ғүмеремдең, ахыры, ҡышылыр.
Яҙ, йәй үтһә, көҙө, ҡышы килә,
Миҙгел тигәндәре ошолор.

Миҙгелдәрҙән көнләшеп тә ҡуям:
Ҡышы үтһә, шаулап яҙ килә.
Хәҙер бына йәшлек ҡайтһын ине,
Ғәйрәт көсө менән саф көйгә.

Ошо хистән йәшәрәм дә китәм,
Йөрәк менән тел ул ҡартаймай.
Эшләнәһе эштәр тау ҡәҙәре,
Ҡуна алам эштә, ҡайта алмай.

* * *

Бөтәһен дә бер ыңғайға
Ала барам, һала барам.
Көн аралаш, эш аралаш
Яҙа барам, яна барам.



Минең күңел, әйтерһең дә,
Әрнеп торған бер йәрәхәт.
Миңә генә тейгән кеүек
Донъялағы бар хәрәкәт.

Болот аша ҡояш ҡыуып,
Алға барам, алға барам.
Болоттарҙы ҡыуа, ҡыуа,
Атыласаҡ таңға барам.

Бер күренәм, бер юғалам,
Мин ай— күктә, болот — шаршау.
Бар булмышым — донъялыҡты
Яратыуҙан ғына сарсау.

## БАҘАР ҠАЙНАЙ

Ата — ҡыҙын, инә ул танымай,
Исең түгел, баш китерлек хаҡтар.
Хәүеф-хафа йөрәгемде баҫа —
Хәтеремдә... кеше һуйған саҡтар...

Бөгөнгөмдә бөлә барған илдең
Хафалары шул заманға илтә.
Ил имгәге илле күтәрәм мин,
Тик имгәктең йөгө ниңә илгә.

Тәүбә-тәүбә, әсә бала салған,
Имгәк булғас илгә батшалар.
Хан башына бей еттеме бөгөн?
Нимә ҡарай халыҡ, башҡалар?

Миллионлы коммунистар ҡайҙа,
Боҫтоғоҙмо, ҡайҙа әйтер һүҙ?!

Беҙҙең тиргә һуғарылып көткән
Ҡиләсәкте әҙләй күпме күҙ!

Халыҡ тунын кейгән демократтар
Һарыҡ итеп ҡыуа халҡымды.
Торғонлоғо күсте бөлгөнлөккә,
Нәфрәттәрем быуа алҡымды.

Ҡеҫә генә һуя был әҙәмдәр...
Аҡса ҡолдарынан ғәрләнәм.
Бысаҡ сарламаһын инде бәндә,
Намыҫ ҡалһын сыҡмай тәртәнән.

## УФ, АРЫНЫМ, ТИЕП

Мең мәшәҡәт... кемдәр уйлап тапҡан
Донъялағы бөтә ваҡлыҡтарҙы.
Буталанһаң ошо ваҡлыҡтарға,
Күмеп китә
Күңелдәге ыйиы, сафлыҡтарҙы.

Көнөм һала тора ҡырҡ мәшәҡәт
Инде шиңә барған иңдәремә.
Көнөм үтмәй тигән бәндәләргә
Иҫем китә —
Арып килеп һеңәм мендәремә.

Ҡылған эштәр, йәшәлгән дә ғүмер...
Барлап сығам, барыһы хаҡ кеүек.
Бигерәк инде етеҙ үтә ғүмер,
Ҡайтыр яҡҡа
Боролоп та сыҡҡан ат кеүек.

Ғүмер өҫтәп тора хафаларын,
Мәшәҡәттәр тағы теҙелгәндәр.



Мендәремдәй үҙ ит мине берүк,
Ғәзиз тупраҡ,
Ғүмер үтеп, һулыш өҙөлгәндә.

## АРЫНЫМ

Ҡышҡа керһәм, емһеҙ ҡошсоҡ кеүек,
Яҙҙы көтөүемдән арыным.
Был донъяның йәнде бер бөткөһөҙ
Өтөп китеүенән арыным.

Һәр ашаған һайын өйөлөп ҡалған
Һауыт-һаба йыуып арыным.
Башҡайыма бер туҡтауһыҙ яуған
Һорауҙарҙы ҡыуып арыным.

Яҡтырмаҫ та тормош, аяҙымаҫ
Көндәремдән яман арыным.
Иркәләмәҫ йәрҙе көтөп үткән
Төндәремдән тамам арыным.

Инде килеп эшләй-эшләй генә
Елкәм сейләнеүҙән арыным.
Етешһеҙлек йөрәк ҡаҡҡан һайын
Сөйгә әйләнеүҙән арыным.

Ығы-зығы, сетерекле заман,
Хаҡтар яһағынан арыным.
Артығыраҡ хаҡ түләгән һайын
Аслы-туҡлы ҡала ҡарыным.

Көнө-төнө бер фекергә килмәҫ
Анау депутаттарҙан арыным.
Сүбәк сәйнәр заман, әллә үҙем
Донъя сиктәренә тарыным.

Арыным мин...
Йүгереп йөрөп кенә арыным.
Ай, арыным!
Йөрәк туҡтай хатта,
Арып йәшәүемдән арыным!

## ЭЙ ХАЛҠЫМДЫҢ ИЗГЕ ИХЛАСЛЫҒЫ

Эй халҡымдың изге ихласлығы!
Күңел хазинаңа иҫ китә!
Донъя матур, ошо матурлыҡта
Татыу йәшәүҙәргә ни етә!

Галле өлкәһенән дуҫтар килгән,
Ихласлыҡтан күңел кирелмәй.
«Немец дуҫ» тиеүе әллә нисек,
Әллә ниңә телем бирелмәй.

...Йөрәгемә аҡыл йүгән һала.
Йүгән кеймәҫ тайҙар бит һирәк.
Көн өсөн дә түгел, ил өсөн, тип
Йығылып уҡ ҡуям, мин — тирәк.

Галле өлкәһенән дуҫтар килгән,
Йәйрәп китеп күңел кирелмәй.
Немецҡа «дуҫ» тиһә телгенәйем,
Күңелкәйем барыбер бил бирмәй.

Килгән дуҫтар ғәйепле лә түгел,
Әрнетә шул һуғыш яраһы...
Улар дуҫ булам тип әҙләһә лә,
Әрнеүҙәрҙе баҫыр сараны,
Баҫылмай шул, һуғыш яраһы.



## ЕҢГӘЛӘРЕМ

һәҙнә еңгәмә бағышлайым

Ап-аҡ ҡына ап-аҡ сәстә
Ап-аҡ ҡына тыйнаҡ еңгәләрем.
Аҙымдарын таяҡ менән терәп
Бик һаҡ ҡына атлай еңгәләрем.
Үҙенсә лә матур ирендәрен
Ҡымтып һөйләр көләс еңгәләрем.
Йөрәк түрҙәренән моң түгелә,
Тыңлап ҡына торһа һөйләгәнен.
Һуғыш йылын, егеү аты кеүек,
Һөйрәп сыҡҡан көслө еңгәләрем.
Уйлап ҡына тороп шул йылдарҙы
Уйҙарымдан иҫем үңгәләнә.
Бөксәңләп тә атлап китте еңгәм
Таяҡ менән терәп аҙымдарын.
Урынынан ҡуҙғалмаған кеүек,
Ҡарап торһаң аҙым-алымдарын.
Һәйкәлдәр ҙә һеҙгә бик аҙ булыр
Аслыҡ, һуғыштарҙа еңгәндәрем.
Усың уртаһында йөрөтөрлөк
Ил инәһе генә — еңгәләрем!

## ЕҢЕҮ ЯҘЫ

Ҡырҡ бишенсе еңеү яҙы бөгөн,
Тирә-йүндә оло тантана.
Күҙҙәремдән шымрап йәштәр тама,
Йөрәгемдән һыҡрап ҡан тама.
Еңеү яҙы итә тантана.
Еңеү яҙы, иҫкә алыу яҙы,
Сәскәләргә сумған тирә-яҡ.
Аҡ мәрмәрҙә алтын исемлектәр,
Башын эйгән ергә ал байраҡ,
Шау сәскәгә тулған тирә-яҡ.

## ТЫУҒАН КӨНӨМ

Тыуған көнөм, бәхетле көн булған —
Туғыҙынсы майы ҡырҡ биштең.
Ҡолаҡ һалыусы ла булмағандыр
Тауышыма, илаҡ-еңмештең?

Мин илаҡты әүрәткәндәй был көн
Һандуғастар сут-сут һайраған.
Бөйөк халҡым менең тыуған көнгә
Тыныслыҡтан бишек яһаған.

Еңеү менән бергә шау-гөр килеп,
Ғәзиз илем тыуған яңынан.
Һандуғастар ышанысла һайрап
Уянғандар еңеү таңынан.

Өркмәй генә һайра, һандуғасым,
Иҫкә алма һуғыш шаңдауын.
Баҫып һайрар тирәгеңде һинең
Борсомаһын өсөн саң-дауыл.

Йөрәгемде һәр тарафҡа бүлеп,
Һаҡҡа ҡуям һәр көн таңдарҙа.
Тыныс булһын, тимен, ерҙә тормош,
Уҡ-һаҙаҡтар ҡалһын яндарҙа.

## ЙӘН ӨШӨГӘНДӘ

Тышта саҫҡау, өйҙә һалҡын,
Баштарымда мең һорау.
Йәнде йылытырмын да ул,
Илемә төшкән ҡырау.

Ел-дауылға ҡаршы торор,
Ҡөстәремде барлайым.



Илем сәскә генә атыр
Минуттарҙы һанайым.

Терелтергә изге уйҙар,
Йылы хистәр барлайым.
Ҡабат ҡырау һуға алмаҫлыҡ
Ғәмәлдәрен табайым.

## РӘСӘЙҘЕҢ ЯҢЫ ГЕРБЫНА

Р. Бикбайға эйәреп

Һинән фарман, һинән бойроҡ,
Ике ҡанат, бер ҡойроҡ.
Бер кәүҙәңә ике баш,
Үҙең төптө тиле баш.

Ике суҡыш, бер бөрләтәү,
Илдәрҙе йота бөтәү.
Илең күрмәҫ берәр күҙ,
Түҙмәһәң түҙ, тигән һүҙ.

Бер аяғында суҡмары,
Икенсеһендә ҡалҡан.
Суҡмар менән ике башҡа
Бер тондораһы ҡалған.

## АХ, ФИРҒӘНӘ

*Ни эшләнең һин, ерем, ни эшләнең?*
*М. Пәлил*

Ах, Фирғәнә, ҡаршы алған инең,
Ал розанан ҡыҙыл ут сөйөп.
Нимә булды һиңә, Үзбәкстан?
Ҡайтып барам янып, ут көйөп.

Ах, Фирғәнә, зәңгәр ҡалам минең,
Яҡын күреп килдем үҙеңә.
Алһыу гөлдәр урам тулаһына
Шатлыҡ бөркөп торҙо күҙемә.

Аҡ пахталай, ап-аҡ күңелеңә
Ҡем тамыҙа ҡара ағыуын?
Тарих кисермәҫлек енәйәткә
Ҡем этәрә, бутап саф һыуың?
Дауам итә хөсөт ағыуын.

Өндәшәм мин Йәлил теле менән:
Ни эшләнең, ер, ҡарар ерең юҡ?!
Стәрлемдә туған телем ҡорой,
Төркиҙәрҙең бөгөн ере юҡ.

Был хурлыҡлы вәхшәт түгелме ни!
Ҡарабахтар ҡабат бүленә.
Ваҡ милләттәр, кемдәр ҡотҡоһонан
Балта саба тамыр-түленә?

Ҡемдәр ҡотҡоһонан ҡоторҙоғоҙ,
Ҡәрҙәштәрем, оло-кеселәр?
Бер шырпынан усаҡ тоҡандырып,
Бер көлсәне бүлгән кешеләр?

Һәр бармаҡты тешләп ҡарайым да
Барығыҙ ҙа ғәзиз, уйлайыҡ.
Динебеҙ бер, телебеҙ бер беҙҙең,
Рухи берҙәмлекте юймайыҡ,
Ҡан-ҡәрҙәштәр, әйҙә, уйлайыҡ.

* * *

Намыҫын да онотоп ҡуйып,
Һөйләй ғәйбәт.



Ваҡытлыса ул тәм таба,
Шуныһы һәйбәт.

Ынйы, ысыҡ ялтлап китһә
Зөбәржәттәй еремдә.
Йөрәк ынйыларым ҡалһын
Күңелдәрҙең түрендә.

Йыуатмағыҙ мине, әүрәтмәгеҙ,
Күңелкәйем тулы, туп-тулы.
Йомшаҡ ҡына әйткән һүҙҙәргә лә
Түгелергә тора был юлы.

Әтәс түрә ҡунаҡсаға,
Менеп ҡунаҡлай.
Тауыҡ һалған йомортҡаға
Үҙе ҡытаҡлай.

Эй донъям, таң кеүек
Нур һибер мөғжизәм.
Сығып төн өңөнән
Бөгөн мин нур гиҙәм.

Бар үткән, киләсәк тик утта,
Уртала ҡалыуым — бит утта.
Ҡар өтөр ҡуҙ булып, миләштәй,
Баҙырып балҡыныммы юҡҡа?

Күҙеңдә йәштәрең күрҙем дә
Йәшерҙем устарым эсенә.
...Тешләнгән тештәрең яҙылды
Илағас түштәрем өҫтөндә.

Йәшел ялҡын ялмағанмы
Ямғырҙан һуң яланды?

Әллә үҙем йәшлегемдең
Ялҡынында янаммы?

Зәңгәр күктең зәңгәрлеген,
Ҡосаҡлап алғым килә.
Һәр тарафҡа, һәр күңелгә
Зәңгәрлек һалғым килә.

## ЙӘШӘГӘС

Йәшәгәс һин ерҙә шулай йәшә,
Күк ғәләмдең серен асырлыҡ.
Ир-егеткә тиңдәш эш башҡарһаң,
Үҙе бер бөйөклөк, батырлыҡ.

Эшләгәс тә шундай эштәр эшлә,
Һәр көнсөлдөң эсе янырлыҡ.
Дуҫ-иштәрең һөйөнөшөп китһен,
Эшһеҙлектәр фәһем алырлыҡ.

Тап һин дуҫтың ерҙә шундайҙарын,
Фирҙәүестәй йәннәт аҫылын.
Хөмәйрәләр кеүек тәүәккәлен,
Әлфиәләр кеүек таҫылын.

Ерҙә шундай дуҫтарым бар минең,
Араларҙа күпер — тоғролоҡ!
«Үҙеңдән дә дуҫың яҡшы булһын»
Тигән мәҡәл хаҡы торорлоҡ.

## КИЛЕШӘ

Аҡ ҡайындар иңдәренән аша
Толом бәрһә, харап килешә.
Бармаҡ батмаҫ ҡыҙҙар толомона
Ҡаҙап ҡуйһаң, тараҡ килешә.



Сәйгүн ҡапҡасылай түше тирткән
Ҡыҙ-ҡырҡындар юҡҡа көлөшә.
Ҡөлһөн-көлһөн, бындай дәүерҙә бит
Ярыҡтан да көлөү килешә.

Йүгән күрмәҫ ҡонан кеүек ярһыу
Ир-егеткә дала килешә.
Ир беләген биләр ҡатын-ҡыҙҙың
Беләгенә бала килешә.

Өйөн йәмләп, уй-хистәрен тәмләп,
Үҫтергәнгә тирәк килешә.
Ил аҡылын йыйған ил инәһе
Түр биләһә бигерәк килешә.

## ӨҘӘҢГЕЛӘ — ИРҘӘР АЯҒЫ

Елеп кенә сапһам далам бар,
Ҡыҫып ҡына һөйһәм балам бар.
Шау-гөр килгән матур ҡалам бар,
Ил инәһе кеүек анам бар.

Ил хәстәрен иңдәренә һалған
Ирҙе биләгәнгә беләгем,
Донъя хәле хәүефләнгән һайын
Тертләп кенә тора йөрәгем.

Ҡылыс ҡында, уҡтар янда ла ул, —
Өҙәңгелә ирҙәр аяғы.
Йөрәгем гел дауыл уртаһында
Илдә ҡупмаһын тип саяһы.

Һиҫкәнәм дә һәр тарафҡа бағам:
Донъя буйлап уйым сабыулай.
Сеүегеҙсе, бары бер аҙға,
Йәрем йоҡлай арып, сабыйҙай.

## ЙОҠО

Йоҡо кемгә ниндәй хәлдә дауа? —
Ауырыуға дауа дарыуҙай.
Ир-егеткә ҡанын нығытырға,
Эш эшләргә кәрәк, арымай.

Өләсәйҙәр ойоп ҡына ала
Көй көйләгән генә ыңғайҙа.
Күбәләктәй йәнгә керпек һирпһә
Туҡырайҙар улар шулай ҙа.

Ҡиленсәктәр йәре бәләгендә
Һулыш алһа, етер тәүлеккә.
Олатайҙар һунарсылай йөрөп,
Көндөҙ йоҡлап ала төнлөккә.

Эй мөкиббән, йоҡо алмаҫ бер йән,
Әсә тиклем әсә йәнлеһе,
Күкрәгендә уйнап, тәпәй булған,
Сабый имгән сакта — тәмлеһе.

## БЕР ҠОТ КИЛӘ

Һайлап баҫып ҡауландарға
Ялан буйлап бер ҡарт килә.
Осҡон сәскән һынсыл ҡараш
Тирә-йүнде байҡап килә.

Күк тамырҙар тиртҡән ҡулын
Билкәйенә һалып килә.
Күк күгенә сөйөлөр көс
Иңкәйендә алып килә.



Бөркөт кеүек осҡор ҡараш —
Ялан буйлап бер ҡарт килә.
Һайлап баҫып ҡауландарға
Бер ҡарт килә, бер ҡот килә.

## ИМӘН ҺЫНМАҪ ТИМӘ

Ҡерпектәремә бәҫ ҡунғас,
Ҡерпектәр эреләнде.
Мәшһүр һалҡын, керпек туңмаҫ,
Бәҫләндер бөрөләрҙе.

Яланғас ботаҡтар, ана,
Бәрелешә елдәргә.
Илаһи көс, һаҡлай күр һин
Бөрөләрҙе йәйҙәргә.

Ҡоштар оса алмай килеп
Аяҡ аҫтында аунай.
Өҙлөкһөҙ ел тартҡылауға
Бөгөлә имән, аумай.

Имән аумаҫ, тип уйлама,
Һынып китмәһен, шартлап.
Имән кеүек ирҙе бөгә,
Был тормош, тормай һаҡлап.

Һыным тейеп кенә тора,
Тәбиғәткә, ерҙәргә.
Ауыр һүҙҙәр, ҡәҙерһеҙ йөҙ
Атмағыҙсы ирҙәргә.

## АБЫНМАМ МИН

Күҙ алдыма килә: йәнһеҙ бәндә
Йән-фарманға ҡыуғас бейәне,
Ҡолон һалған ине... Бөгөн миңә
Ошолай уҡ яҙмыш тейәме?

Ҡыҫырыҡлап ҡыҫып тар һуҡмаҡта
Һыҙырғанда ҡайҙа һыйынам?
Йәнтәслимгә мин йөк йөкмәп киләм—
Ғәзиз ерҙе алып буйыма.

Ҡара көйгән арҡам янһа яныр,
Йөкмәр саҡта йөктән арынмам.
Абынһам бит үле ҡолон булып
Ер төшөргә тора ҡарындан.

## ЙӘН ӨШӨНӨ

Ҡай шишмәнән һыуҙар эсәһең, тип
Хәл һорашып миңә өндәшә ул.
Белеп торам, минән арыуыраҡ һыу
Эсеп ҡуймаһын, тип көнләшә ул.

Хажға барҙыңмы тип саҡ йығылмай,
Хәле бөттө, бахыр, баяғының.
Шишмә һыуын эскәс кенә бер аҙ
Быуындары ныҒый аяғының.

Күҙе байҡап сыға өйөм эсен:
Китмәнеме, тиҙер, артыҡ артып.
«Үпкәң насар, ауыр тын алаһың,
Арығанһың, ахыры, донъя тартып?»



Зарҙарымды көтөп ала алмай...
(Күҙҙәренә баҡҡас йән өшөнө.)
Ҡасан ғына ҡарлы-боҙло һыуҙан,
Ялан аяҡ йөкмәп шул кешене
Алып сыҡҡан инем...

## ЙЫУАТМАҒЫҘ

> Ҡайһығыҙҙың ҡулы йылы?
> Бәйләйһе бар йөрәкте.
>
> *Х. Туфан*

Көслө был тип миңә ышанмағыҙ,
Ауыр һүҙҙәр әйткәс, йыуатмағыҙ —
Тышҡы ҡиәфәт был, һыр бирмәү.
Яландарға сығып илаған бар,
Сәс салдарым йәшереп буяған бар,
Гонаһ булыр быны бер күрмәү.

Ҡайһығыҙҙың тубыҡтары йомшаҡ,
Ҡалыр ине күңел шиңеп, бушап,
Алдығыҙға ятып илаһам.
Иҫәңгерәгән башым, иҫәңгерәгән,
Күҙҙәр күрмәй хатта, ҡайҙа барам,
Көс бирә күр миңә, илаһым!

## ЯҢҒЫҘ САҠТА

Кем менәндер һөйләшәһем килә
Күңел тулы мәрйен-һүҙҙәр бар.
Шул мәрйенде епкә теҙгән кеүек,
Мине тыңлар ерҙә кемдәр бар?

Төнө буйы һөйләшәһем килә
Йәрем беләгендә йәм табып.

Ауыр саҡтарымды һөйләгәндә
Алғылаһын күҙҙән йәш тамып.

Таң ҡараһын таратырлыҡ итеп
Тел осомда тора һүҙҙәрем.
Ҡараңғылыҡ ҡапшап тәҙ(е)рәмдән
Әллә кемде көтә күҙҙәрем.

Әллә кемде көтә, әллә кемде
Ғүмер буйы көттө күңелем.
Сер һөйләнем дусҡа, мине аңлар
Кеше түгел дә ул түгелен.

Икһеҙ-сикһеҙ тормош биләнендә,
Әйтерһең дә, яңғыҙ ҡош үҙем.
Ҡараңғыла сараһыҙҙан ҡунған
Ҡоштан килә мәллә был түҙем?

## БАШЫНАН ДА ҮРКӘСТӘРЕ БЕЙЕК

Башынан да үркәстәре бейек,
Салбарланып алған дөйәләр.
Үрҙән генә күҙен ҡыҫып ҡарап,
Төкөрөк сәсеп баҫып киләләр.

Бар мөлкәтен сүлдең үркәсенә
Тултырған да йөрөй маһайып.
Һимеҙ — һылыу, байҙар — сәсән инде ул,
Ике сифат баҫҡан, ҡаҡайып.

Ыҙғыр ҡышта үркәс йығылып төшкәс,
Муйын ғына ҡала кәкере.
Дөйә муйынынан кәкере эште
Ҡыла әҙәм, сәсрәп киткере!



Дөйә хәле тәбиғи хәл, үрҙән
Баҡҡан әҙәмдәр бар — сиркәнгес.
Тапап үтер, битенә ҡаплап алғас,
Намыҫһыҙлыҡ, тигән бөркәнгес.

## БАР ШУНДАЙ САҠ

Бар минең дә йөрәгемдә
Һалған саҡтарым уҫҡа.
Серемде ихлас сисергә
Һыуһайым ысын дусҡа.

Ашамаһа ла туҡ, тиҙәр
Бохарҙа малы барҙы,
Бохаралағы дуҫыма
Серем сисергә барҙым.

* * *

Ҡағылып та, һуғылып та үҫтем,
Иркәләнеү булды аҙ.
Бер йылмайған ҡарашында
Булғандыр бөткөһөҙ наҙ.

Туңған саҡта осҡондо ла
Ялҡын, тип алданғанмын.
Һемәйткәндә тормош үҙе
Яҙмышҡа һылтанғанмын.

Ай үтәһен көн дә үтеп,
Диңгеҙҙе кискән дә мин.
Дөм яңғыҙым тороп ҡалып,
Һағышты эскән дә мин.

## ИХЛАСЛЫҒЫМ — ЗӘҢГӘР КҮГЕМДӘЙ

Изгелектәр эшләп һыуға һалам,
Белер әле, тиеп балыҡтар.
Балыҡ белмәгәнде баһаларлыҡ
Еркәйемдә минең халыҡ бар.

Таш атҡанға ашым менән атам,
Аш етмәһә — бирәм ҡашымды.
Эйелгәнде ҡылыс киҫмәй, тиҙәр,
Була ваҡыт — эйәм башымды.

Башты эйгәс түбәнһенеү түгел,
Ҡеселеклек тигән бөйөклөк!
Ҡесе йәнен бөйөк күрһәткән бар —
Йәндәреңә ҡоро көйөклөк.

Изгелектәр эшләп киләм әле —
Изгелегем ихлас күңелдән.
Балыҡ белмәгәнде халыҡ беләә,
Ихласлығым зәңгәр күгемдәй.

## ҠЫЙЫН

Ҡыйын... Йәндәремә ҡыйын.
Донъя әйтә, миңә һыйын!
Таныш әйтә, аян-аян,
Ышан да һин, миңә таян!

Иҙел күрмәй итек сисеп,
Төпкә керәм, Иҙел кисеп.
Тулҡын әйтә, шаярмайҙар...
Иҙелгә бит таянмайҙар!
Ысынында бер ҡатлыны
Ауыр саҡта аямайҙар!



## ХӘТЕР

Уйнап әйттем, уйламаным,
Ҡалдырырмын, тип, хәтер.
Үкенесле уйҙан, шәмдәй,
Эстән һыҙамын хәҙер.

Уйнап әйттем, уйын һүҙҙең
Ағыуын эстем үҙем.
Аҡсаларға һатылмай шул
Ҡалған хәтер, бир түҙем!..
Бөгөн янам бер үҙем,
бер үҙем!..

## «ҺИН ЕГЕТ» ТИҘӘР

«Егетһең һин», — тиеп фәстерәләр,
Ҡайһы фиғел минең лайыҡтыр.
Шуны беләм, терлек, кешелеккә
Минең күңел уяу, айыҡтыр.

Көнөм, төнөм һис тә аямайым
Көсөм етер эшкә, көрәшкә.
Барыһына өлгөр булған өсөн
Егетлекме минең өлөшкә?

Күңел бит ул, юҡтан үсеп китә
«Егетһең һин» тигәс, мин — егет.
Эй мөхәббәт, һинең алда гелән
Ниңә төшәм икән мин ебеп?

## «НӘБИ МАЛАЙЫ»

Бушлатымды тышау менән быуып,
Атайымдың туҙған быймаһын,

Ҡәпәс кейеп үҫтем, атай ҡартым,
Малай юҡ, тип, әйҙә бошмаһын.

Сүкеш тотоп, бармағыма һуҡһам,
Күҙ йәштәрем әрнеп һыҡманым.
«Нәби малайы», тип үртәп ҡасҡан,
Малайҙарҙы тотоп туҡманым.

Атҡа менеп, киләсәккә саптым,
Шулдыр тиеп менгән саптарым.
Төрлө ваҡыт булды: алға елгән,
Йығылып та ҡалған саҡтарым.

Тик барыбер ғорур тотоп башты,
Мәшәҡәтен тейәп донъяның,
Ауырлығын һалып иңдәремә,
Еңеп сығырмын, тип уйланым.

Ауыҙлыҡлап алып Саптарымды,
Ажарланып ҡабат мендем дә,
Маҡсат-тауға елдем, бейеклеген
Яулап аласаҡмын тинем дә,
Ҡаяларҙы яулар бөркөт кеүек
Тойоп осам бөгөн үҙем дә.

## ЯРЫШ-ҠАНАТ ИҢДӘРЕМДӘ

Беләгемдә уйҙарымдай,
Йәпләп эләгән ҡороҡ арҡан.
Ҡиҙәнә килеп тай тоторға
Һауалатып ҡороҡ атам.
Изге эштә һынһын арҡам,
Йән көсөмә ҡороҡ тартам.



Елтерәтеп алып китер
Тайҙы тотор ирҙәр һирәк.
Тайым китте ерҙән һөйрәп,
Хатта үлән ҡалды көйрәп.
Еңмеш тайҙай ғәрлегенән
Тулап китте утлы йөрәк!

Йөрәк, тик һин ярһыумы ни?
Көсө шиңә ҡулдарымдың,
Ҡулда ҡалды ҡороҡ осо,
Сиге кеүек юлдарымдың.
Әллә нағыш өсөн генә
Һин, ҡулдарым, яратылдың?

Ярыш-ҡанат ярып үҫте
Ғәрселлегем атҡас күккә.
Мин яңынан тыуҙым, ахыры,
Көсөм артты, артты күпкә.
Көсһөҙмөн тип яңылышҡанмын,
Ҡайҙан килгән былдай үпкә?

Сәмдәр татытҡан тәм менән
Ялдарынан тотоп алдым,
Елтерәлеп барған ыңғай
Ат өҫтөнә ҡуна һалдым.
Моронона матҡып тотоп,
Юғәнемде элә һалдым.

Ауыҙлығын ҡан сәйнәтеп
Үрәпсетеп тайҙа еләм,
Ҡулдарыма урап тотоп,
Теҙгенемде тартып киләм.
Шатлығымдан, тартынмайса,
Рәхәтләнеп илап киләм.

## МӨХӘРРИРҘӘРГӘ ҮПКӘ

Өфөләрҙән ҡайтып төштөм,
Яҙғандар сыҡты сүпкә.
Ҡукрәгемә бигерәк тулды
Мөхәррирҙәргә үпкә.

Япраҡ ярҙырһам елдәрҙән,
Был һүҙҙәргә теймә, ти.
Һинән алда япраҡ ярҙы
Шағир Рәшит Ниғмәти.

Ауыҙ астым, әсә, тел, тип,
Ҡашҡайҙары йәмрәйҙе.
Һин, һеңлекәш, бында тағы
Ҡабатлайһың Рәмиҙе.

«Рәсәй» шиғырымды һыҙғас,
Тәпәй баҫты сәстәрем!
Был сюжетҡа шиғыр яҙып
Маҡтау алды М. Кәрим.

Ҡаҙ өмәһен яҙһам, күптән
Яҙып сыҡҡан Атнабай.
Мине яҡлап тормаҫ инде
Атнабайҙы яҡламай.

Болон тиһәм, болан тиһәм,
Асһам гөлдәрҙең тажын,
Әнисәнең һүҙҙәре, тип
Һыпырып ҡуйҙы таҙын.

Бар сюжетте минән алда
Яҙғандар ҙа бөткәндәр.
Мин шағирә булмам инде,
Яҙһын, әйҙә, бүтәндәр.



## ҠАРАУЫЛДА ТОРҒАНДА

Төн йөҙөндә йүгереп йөрөп
Ҡаршы өйҙә эт өрә.
«Мин дә һаҡлай алыр эштә
Ник тораһың?» тигән төҫлө,
Өйҙән өйгә йүгерә.

Эй, маъмайым, эт хәлендә
Ҡалған хәлем, күрәһең.
Күп ваҡытта хужаларҙан
Был донъяның торғанын,
Белепме әллә өрәһең?

## ВЛАСТЬ

Власть башы кемдәр генә өсөн?
Бәғерһеҙҙәр тәхетелер власть.
Тәхетте ялағайҙар һаҡлай,
Һәр осраҡҡа ихлас йәйеп ҡолас.

Таланттарға тәхет кәрәкмәгән,
Алтын таж да хатта киймәгәндәр.
Таланттарҙы ғүмер-быуындарға
Власть әһелдәре һөймәгәндәр.

Таланттарҙы һыуға батырғандар,
Таланттарҙы утта яндырғандар.
Аҫҡандар йә быуып үлтергәндәр,
Киҫкәндәр йә терәп атҡандар ҙа,
Һөргөн ҡыуып һыуһын ҡандырғандар.

Рәсәй, Рәсәй, сабаталы Рәсәй,
Бөгөн бына тағы сәсәйһең һин.

Бар донъяңды бюрократтар баҫҡас,
Мафиоздар менән йәшәйһең һин.

Сабыйымды телһеҙ, мине илһеҙ иткән
Ҡай властан хаҡлыҡ даулайым һуң?
Проценттар һанай башҡорт башын,
Ҡанһырап мин уйҙан тулайым һуң?

Йөрәккәйем һыҙлай, иҫкә алып,
Башҡорттарҙың бөркөт саҡҡайҙарын.
Париж асфальттарын сүкеп үткән
Замандарын, башҡорт саптарҙарын.

Һыбайлылар ҡайҙа, ҡылыс һурыр,
Илде яҡлар баш-башлыҡтар?
Хоҙайбирҙин, Шайморатов нише,
Вәлиди ҙә кеүек төп башҡорттар?

Быуындарҙы быуындарға ялғап,
Ҡем тыумаған ергә, кем килмәгән?
Эй, башҡортом, кемгә тапшырҙың һин
Үҙең генә тотор ҡыл-дилбегәң?

## ТҮРӘЛӘРҘЕҢ ҠАБУЛ ИТЕҮ КӨНӨ

Түрәләрҙең ҡабул итеү көнө
Шишәмбе көн.
Алтын минуттарҙан ҡорбан салам
Нисәнсе көн!

Сират туҡтап ҡала һәр ваҡытта
Миңә еткәс.
«Эш ваҡыты үтте», — тиҙәр гелән
Ваҡыт бөткәс.



Түрәләрҙең ҡабул итеү көнө —
Йома көнө.
Алтын ғүмер үтте-китте,
Шомға күмеп.

## «АШҠАҘАР» ГӘЗИТЕНӘ

Май эсендәге бөйөрҙәй әсәһенең
Йөрәгендә генә ятҡан сабый бала.
Йөрәк ярып тыуа яҡты был донъяға,
Тауышына бөтә донъя шат, таң ҡала.
Йылы ҡуйын, иркә һүҙгә, наҙға туйғас,
Ҡуйыны ла тар тойола әсәһенең.
Айырыла, китә бала, башҡалана,
Әсәһенең тоймай күҙ-йәш әселеген.
Башҡаланды «Ашҡаҙар»ым, яндай балам,
Күҙҙәрҙә йәш, йәндә әрнеү, ҡойон уйым.
Һәр аҙымың өсөн тертләп торор әсәң,
Бағышланыр һиңә ҡалған ғүмер буйым.
Атҡа менһәң, ғорурланып тыштан үҙем,
Ботон ҡыҫҡан әсәң һәр саҡ мин булырмын,
Бәйгеләрҙә еңеп сыҡһаң, аҡ юл, балам,
Изгеләрҙән изге доға мин ҡылырмын.
Аҡ бәхеттәр, аҡ юл һиңә киләсәктә,
Йырла, йәшә, иңлә, буйла ҡыр даланды.
Тик шулай ҙа ауыр, ҡыйын, йәнгә ҡыйын,
Башҡа сығарыуҙар, ай, үҙ баланды...

## ҺӘР БЕР ҺҮҘЕМ ҠОЛАТА

Репрессия ҡорбаны
ауылдашым Ғәлимулла олатайға
(бер баш тай арыҡлыҡтан һәләк
булған)

Машиналарҙа еләләр,
Ҡилде заман, олатай.

Ул ваҡытта һинең башҡа
Ниңә еткән ала тай?

Зиһенемә һорау бирәм,
Заманаламы ғәйеп?
Үсле дошман алдан барһа
Ҡоламам тимә тайып.

Йығылам да тороп баҫам —
Алда ауыр юл ята.
Тайым да юҡ, тура әйткән
Һәр бер һүҙем ҡолата.

## ИЛШАТ ЙОМАҒОЛОВҠА

Йондоҙҙар күп ерҙә һәр кимәлле —
Яҡтырағы, һүрән янғаны.
Ҡайһылары атылып һүнә күктә,
Мыҙлап ҡына балҡый ҡалғаны.
Сәхнә йондоҙҙары фәҡәт шулай,
Һүрән балҡыу һиңә төҫ түгел.
Ир уртаһы — сәхнә йондоҙо һин
Һөйөндөрөп илде, дуҫтарыңды,
Шатлыҡ өләшеп тә балҡы гел!

## ФАРИС ҒӘЛЛӘМГӘ

Сихри йондоҙ үҙе тыуҙырғандыр,
Был донъяға тик изгелек теләп,
Серле бишек кенә тирбәткәндер,
Йөрәгенә изге ниәт төйнәп.

Өндәремдә мөғжизәләр тыуа,
Ике донъя бергә ҡауышҡан.



Әйтерһең дә ошо сәғәттәрҙә
Саҡ менән Суҡ килеп табышҡан.

Һин халҡыңды, халҡың һине тапты,
Иншалла, тим, камил иманым.
Башҡорт, татарҙың да табибы бар,
Шатлығымдан ултырып иланым.

Ҡайһы йондоҙ аҫтарында тыуҙың,
Уйлаһаң, уй күп ул уйсыға.
Ығы-зығы тойоп ултырылған,
Башҡайымды ҡуям усыңа.

Телен, илен юйып барған ерҙең,
Йәрәхәтле халҡым имсеһе.
«Заман ауыр, бер еңеллек бир» тип,
Ебәрелгән алла илсеһе.

## РӘМИ ҒАРИПОВ ИСТӘЛЕГЕНӘ

Миләштәрең бешһә тамылйышып,
Тупылдашып тама күҙ йәшем.
Әсәһенең күҙ йәштәрен күргән
Сабый төҫлө илай миләшең.

Миләш тамған ҡарҙар — ҡанлы майҙан...
Ҡар-һыу булып аҡмаҫ был ҡарҙар.
Ҡан-һыу булып аҡҡан ҡар һыуының
Аһ-зарынан уйыла был ярҙар.

Ғүмер генәм ауа ярҙар кеүек,
Ҡан яланда хаҡлыҡ даулауға.
Шиғриәтем түгел дан яланы,
Ҡан ялатып һуға танауға.

## ЛЕРМОНТОВ ЭҘЕНӘН

Машуҡ тауҙың итәгендә
Ҡөнләшерлек хәлдәр булған.
Арҙаҡлы ир-егеттәргә
Һөйәлерлек йәндәр булған.

Һылыу батша эфисәре...
Эй, хоҙайым, бирсе түҙем.
Ҡенәз ҡыҙы Мери булһам,
Йүгереп сығыр инем үҙем.

## ЛЕРМОНТОВ ЭҘҘӘРЕНӘН

Машуҡ тауҙың итәгендә
Ике тау ҡуш — ике үҙән.
Эҫе үҙән, һыуыҡ үҙән,
Флюгер йырлап тора үрҙән.

Ике үҙән ҡушылған ер,
Һинең яҙмыш — ғүмер үре.
Һыуыҡ үҙән — Мартыновтыр,
Эҫе үҙән — шағир үҙе.

Нисек ҡулы күтәрелгән?
Аҡыл етмәй һис бер башҡа.
Үҙән шул саҡ иҫен юйып
Әйләнгәндер торатшҡа.

Зар илаған халыҡтарҙың
Күҙ йәшенәнме был тоҙ-тау?
Ҡатлам һаҡлаһа эҙенде,
Минең йөрәк һаҡлар һыҡтау.



Машуҡ тауҙың итәгендә
Эҫеле-һыуыҡлы үҙән.
Сал тарихҡа ҡаранһәм,
Моң түгелә генә үрҙән.

## МИН ИНАНҒАН ЙӘН

Мин инанам ерҙә ике йәнгә
Шиғриәткә һәм дә дуҫлыҡҡа.
Хыянатым булһа мул икәүгә,
Юлығырмын барып бушлыҡҡа.
Шиғриәттең бәҫен һаҡлау юлын
Рәми ағам төплө өйрәтте.
Дуҫлыҡ араһына елдәр өрһә,
Йылынырбыҙ яғып йөрәкте.
Ир бирмәкте, йән бирмәкте үҙем
Шиғриәткә киттем алмашып,
Дуҫлығымдан сатыр ҡорғаным юҡ
Хәйләләрҙе терәп, алдашып.
Хайран ҡалам! Ҡайһы баҙнатлыһы
Араларға килеп боҙ тыға!
Аңлашҡанда күп саҡ хәҡиҡәтте,
Ҡаш төҙәтәм тиһәң, күҙ сыға.

## ШИҒРИ ДОНЪЯМ

Шиғри донъям — бесән сабаммы ни!
Бакуй-бакуй итеп, һыҙырып.
Әллә инде һоҫоп һыу аламмы
Шишмәләрҙән, күнәк тултырып.

Иртә өҙгән туң баланым бешкән
Баҫырып та ҡуйғас, ултырып.
Әйтерһең дә һыбай еләм үҙем,
Болон-яландарҙы ҡыҙырып.

4 Заказ 801

Ҡүктән баҡҡан ай нурылыр шиғыр,
Төшкән энәне лә табырлыҡ.
Күңелдәргә шатлыҡ ҡына биргән
Һандуғас та моңон танырлыҡ!

Күңелкәйем бер ләззәтле ялан:
Йән-тәндәрем китә, аһ, мылйып.
Суғым-суғым булып тәлгәшләнеп
Шиғырҙарым бешә тамылйып.

### ҠАНАТ АЛҒАН КЕҮЕК ҠОШТАРҘАН

Өҫтәлем буш. Әле генә бына
Шаулап сығып китте дуҫтарым.
Дуҫтарымдың йылы усын ҡыҫып,
Ҡыҙып ҡына бөттө ҡулдарым.

Тынып ҡалған өҫтәл өҫтәрендә
Булды бәйге, булды йыр, шиғыр.
Ятҡан үлән кире тороп баҫты,
Тантанаһын алғас йор шиғыр.

Бушап ҡына ҡалған был бүлмәмдә
Бушаһа ла өҫтәл дуҫтарҙан,
Күңел тулы илаһилыҡ ҡалды,
Ҡанат алған кеүек ҡоштарҙан.

### ӨЙРӘТ ӘЛЕ, ӨЛӘСӘЙЕМ

Кендегемде ҡырҡҡас, йәшәү төйнәп,
Ниҙәр юраның һин, өләсәй?
Аҡ биләүес — матур аҡ хыялға
Нисек ураның һин, өләсәй?



Хәтеремдә, һаман хәтеремдә:
«Битлек менән тыуҙың,— тигәнең,
— Таң һыуҙары алып яман күҙҙән
Һаҡлар өсөн йыуҙым»,— тигәнең.

Өләсәйем, ҡайһы ғына йондоҙ
Аҫтарында тыуҙым, әйт әле?
Ҡайһы шишмә һыуҙарында мине,
Бәхет юрап йыуҙың, әйт әле?

Күңелемде ҡасан һуғарҙың һин
«Мәрхәмәтлек» тигән йылғанда.
Ихласлыҡтан, һағыш даръяһынан
Мәхрүм итмәгәнһең, шунан да.

Ҡыҙым тыуҙы минең, өләсәйем,
Таң һыуында һыуҙар керетәм.
Битлеккәйен мин дә, һинең кеүек
Бәхет юрар оло сер итәм.

Өләсәйем, сихри серҙәренде
Баштарыма төшмәй белмәнем.
Балама ла йәшәү бүләк иткәс,
Кендеккәйен илгә төйнәнем.

Ҡыҙым үҫеп килә, тирәк кеүек,
Өйрәт әле, өйрәт, өләсәм.
— Кендек ҡаның тамған тупрағыңа
Изгелек ҡыл, — тиеп өндәшә.

* * *

«Бала» тигән балдан татлы заттың
Мөхәббәте мәшәҡәтен күмә.
Михнәттәре— һыбай менгән аттыр,

«Бала» тигән нәмә шундай заттыр.
Бала өсөн, фәҡәт бала өсөн,
Айға барып ҡайттым, нурҙар һорап.
Мин ҡояштан йылы алыр өсөн
Бер тәүлектә сыҡтым ерҙе урап.
Йоҡоһоҙ төн бары бала өсөн,
Сабыр итә ала был йөрәгем.
Көйөнөүгә ҙур үҫкәнен көткән
Өмөттәрем генә, бар теләгем.
Шатлыҡ йәшен тыйып һөйөнөүҙәр,
Яңғыҙ ғына илау, күнегеүҙәр.
Бар булмышым минең йәшәүемдә
Бала тиеп кенә көйөнөүҙәр.
Ҡаҙаныштар бала тиеп үткән,
Йәшәүемдең күркәм бер биҙәге.
Был донъяның ер кендеге кеүек,
Бала ғына икән төп үҙәге.

### БАЛАЛАРҘЫҢ ТЕЛЕ ҠЫҢҒЫРАУ

Балаларҙың теле ҡыңғырау,
Яуап бирһәң, яуа мең һорау.
Йәмләндереп өйҙөң эскәйен,
Йүгереп тә йөрөй кескәйем.

Күгәрсенгә генә тиңләйһең,
Ин-ин матур көйҙө көйләйһең.
Әкиәттәр теҙеп һөйләйһең,
Ни эшләргә генә белмәйһең.

Берсә асыш, берсә гел юрау,
Тауышҡайы көмөш ҡыңғырау.



### ЭШЛӘНӘ ЛӘ БӨТӘ ЭШТӘРЕМ

Шуҡлыҡтарың, балам, саманан тыш,
Илауҙарың да бит көлөү ҡатыш,
Шулай тойған сағың донъяны.
Талап ҡына итеп алыр сағың,
Тулап ҡына китеп көлөр сағың,
Был донъяның йәме шундалыр.
Эштә талған ҡулдарыма ятып,
Йоҡлап китһәң ҡай саҡ, наҙ уятып,
Иңеләтә арта көстәрем,
Төшөң менән өнөң бутап көлһәң,
Йә һөйләмде тулы әйтә белһәң,
Йылтырап та китә тештәрем,
Эшләнә лә бөтә эштәрем.

### БУЙҒА ЕТКӘН ҠЫҘЫМ

Буйға еткән ҡыҙым ҡай арала,
Күҙҙәренән нурҙар түгелә.
Етеҙ аттың ҡуйы ялымы ни,
Толомдары елдә һибелә.

Эске ғорурлыҡты тыйып торам,
Шатлыҡтарым тышҡа түгелә.
«Ҡайһы йәнгә бәхет һибер» — тиеп
Егеттәрҙең бағам күҙенә.

Һиҫкәнәм дә үҙ-үҙемде ҡат-ҡат
Күҙәтеп тә бағам көҙгөгә.
Әсәһенә ҡарап ҡыҙын ҡос, тип
Әйтмәҫ тиһегеҙме кем генә.

## ҠЫНА ГӨЛӨМ

Тәҙ(е)рәмдә ҡына гөләм
Һыуһыҙ төшкән бөгөләп.
Ҡыҙым китте кейәүҙәргә,
Мин илайым түгелеп.

Тәҙ(е)рәмдә ҡына гөләм,
Һыуһыҙ кипте микән ни?!
Шаулап-гөрләп торған тормош
Үтте-китте микән ни?

Әле генә бәпес ҡыҙым
Үҫеп етте микән ни?
Ун һигеҙе саҡ тулғас та
Минән китте микән ни?

Имеп кенә туймаҫ һөтөм,
Бөттө, кипте микән ни?
Ҡуйынымдан һыуынды ла
Осоп китте микән ни?

Ҡуйынҡайым — ҡош ояһы
Буш ҡалдымы ҡауҙырлап?
Әйтерһең дә, мин түгел, ул
Наҙ, йылылыҡ яуҙырған.

Мамыҡ ҡына түшәктәрем
Ҡаты булды микән ни?
Ҡуйын-ҡуныҫым йылыһы
Һалҡын булды микән ни?

Бешергәндә аш-һыуҡайым,
Боҫ бөркөп һыуыналыр.
Тиле йәшлектән күҙ йәшен
Күрмәй ҙә ҡыуаналыр.



Тәҙрә төбөндә ҡына гөл
Һыуһыҙ кипте микән ни?
Шаулап-гөрләп беҙҙән дә тим,
Йәшлек үтте микән ни?
Ғүмер үтте микән ни?!

## БУЛА АЛМАБЫҘ БАРЫБЕР ДИНДӘШТӘР

Урыҫ миңә, әйе, дошман түгел,
Балта йөрөтһә лә билгенәм.
Иген сәскәс, тамыр сәнстерҙе
Йәнгүзәлдәй ғәзиз ил генәм.

Ун етеһе тулған ҡыҙым, гөлдәй,
Бер иҫ киткес инде, хәйләһеҙ.
«Рус егете мине һөйә»,— тигәс
Уҡ булдым да остом, йәйәһеҙ.

Һин дуҫ булһаң, мин бешергән ашҡа
Төшә күрмә булып тараҡан.
Теге балта билдә генә торһон,
Дуҫлыҡ ебен сапмай аранан.

Саф шишмәләй минең нәҫел-затым,
Ырыуымдан ҡалған аманат.
Беҙ дуҫ булғас, ғөрөф-ғәҙәттәрҙе
Бутамайыҡ, һатып яманат.

Урыҫ миңә, әйе, дошман түгел,
Урыҫ, башҡорт — дуҫтар, тиңдәштәр.
Араларҙа бөйөк дуҫлыҡ ҡалһын,
Була алмабыҙ барыбер диндәштәр.

## АЙБУЛАТЫМ

Йөрәк ҡупты, төндөң уртаһында
Яфалана ҡыҙым тулғаҡтан.
«Тиҙ ярҙам» да оҙаҡлаған кеүек,
Көткәндәргә ҡыйын ул саҡта.

Уй-хафалар ҡойононда үҙем,
Йәндә тулғаҡ, юҡ шул сыҙар хәл.
Үҙем тыуһам, еңел булыр төҫлө
Үткән дә генә үҙем тыуар мәл.

Тыуыухана тупһаһында торам,
Өндәшәмен хыҙыр Ильясҡа:
«Бөртөк кенә ҡыҙым, яңғыҙ балам,
Килә күрсе, — тиеп, — юлдашҡа».

Таң да яҡын, тынды бына буран,
Ялтлап сыҡты ана күктә ай.
Башҡайынан имен-аман ғына
Башҡа итә күрсе һин, хоҙай!

Күҙ-керпектәремде һеҙөлдөрөп,
Йоҡоларым килде күҙемә.
Иҙрәне лә тамыр-быуындарым,
Еңел булған төҫлө үҙемә.

Һиҙемләү был, ҡотолдолар, ахыры,
Бер еңеллек үтте тәнемә.
«Ир бала!» — тип шәфҡәт туташҡайы
Миҙәт өҫтәне лә йәнемә.

Һикереп торҙом, донъя шундай матур,
Һурпа килтерәйем ҡоротлап.
Ай тәбрикләй, Айбулаттыр аты,
Ҡайтып киләм исем ҡороҡлап.



## ЕЙӘНЕМ

Туп-туп итеп тупылдатып,
Атлап китте ейәнгенәм!
Ике ҡулын алға һонған
Ҡалмаҫ өсөн әсәһенән.

Алға һонған ҡулдар, гүйә,
Йүгән тотҡан ир-уҙаман.
Аяғынан даға сыңы
Яңғыратыр ул бер заман.

## КӨМӨШ ТОЯҠ

Яҙ елдәре иҫә, яҙ еҫтәре килә,
Елегеңә үтер март еле.
Ырашҡылар яуа эс бошороп,
Ашау-эсеү наҡыҫ яҙ көнө.
Дүрт күҙ менән көткән безәүкәйҙе
Тағы һорашам мин әсәйҙән.
— Әсәй, әсәй, беҙҙең һәүкәшебеҙ
Ҡасан безәү бирер? Ыуыҙҡайы
Артып ҡалыр хатта бесәйҙән?!
Һорауым да минең үтә серле
Шатлыҡ, муллыҡ күҙҙә тотола.
Барлы-юҡлы ондан ыуыҙ-ҡоймаҡ...
(Төкөрөктәрем йәшерен йотола.)
— Ҡара тояҡ ҡарынында ятмаҫ,
Оҙаҡламаҫ, алла бойорһа...
Уйларға ла ҡурҡып, тик именлек
Теләгән бит әсәй һыйырға.
Теләктәрем тормошома ашмай,
Уйылдырып уйҙар ҡуйырһа,
Сабый саҡты, ас ваҡытты иҫләп,
Сабыр ғына әсәкәйем төҫлө
әйтеп ҡуям:

«Булыр әле, алла бойорһа».
Ҡөтөп ала алмаған хыял кеүек
Ғүмерем буйы йөкләмөн үҙем.
Йөрәгемдән мәңге тыуып бөтмәҫ
Ҡөмөш кенә тояҡ, ай, һүҙем.
Ҡайһы күңел сабый сағым кеүек
Зар сарсаған әле моңло йырҙан.
Күңел хазинама бер бағығыҙ,
Оло байрам, нур сәселеп китһен,
Ҡөмөш кенә тояҡ, ай, нурҙан.

### ҠОРОТ ӘҘЕР

Күлдәк итәктәрен билдән семтеп,
Ҡыҫтырынып, еңен һыҙғанып,
Ҡорот ҡайнатҡанын әсәйемдең
Иҫкә алдым әле һыҙланып.
Ҡаҙан-ҡаҙан ҡайнар был эркетте
Ҡыҙҙар менән йыйылып ҡараныҡ.
Түгәрәләп ҡаҙан тирәһенә
Майлы күперектәрен яланыҡ.
Тәгәс-тәгәс ҡорот кипкән саҡта
Сәй тәме лә ине ҡаҡ ҡорот.
Бөгөн сыҡһам, баҙар әйләндереп
Апайҙарым тора хаҡ ҡороп.
Ғәрләнде лә китте күңелгенәм,
Минме ни һуң ҡорот ҡайнатмаҫ?
Бала саҡтың алтын минуттарын
Ҡем генә һуң йәндә сыңлатмаҫ!
Әскелтем дә ҡорот тәме тулды
Ике генә бөртөк бүлмәмә.
Ҡыҫтырынып та вә еңен төрөп,
Йөрәгемдә йәшәү йәнләнә.
Йәшә, тормош! Ҡорот әҙер бына —
Һуғанлы ла эҫе һурпаға.



Туҫтаҡ менән һурпа өләшәйем,
Ашъяулыҡҡайыма бишбармаҡлы
Еҙ табаҡты ҡуйып уртаға.

### ҺАЛМА ЯӘЙӘМ

Ҡулдарымды йыуып, бисмиллалап,
Ҡамыр баҫҡан мәлем һалмаға,
Алтын йөҙөк, көмөш beләҙекле
Беләктәрем генә талмаһа.

Йоморо йоҙороҡ аҫтарымда сырт-сырт
Ҡамыр ғынам булған, өлгөргән.
Нәҫелемдә әле тыуғандар юҡ
Аш-һыу тирәһендә көлдөргән.

Һалма йәйәм, дуҫтар һыйлайһы бар
Сығыр саҡта сәфәр— хаҡ юлға.
Албырғатма, дошман, уй-хистәрҙе
Шиғыр яҙған сағым аҡ онға.

Һалма йәйәм, ҡағыҙ йоҡалығы
Дуҫтар саҡырырға баҙырлыҡ.
Ҙурая ла бара ҡағыҙ-йәймә
Он һибәләп, шиғыр яҙырлыҡ!

Дүрткел һалма, уйға ғына һалма,
Тотонмаһын бер үк дошмандар!
Дүрт яғымды ҡибла итә алыр
Һалма һоғонорлоҡ дуҫтар бар.

Мин ризыҡҡа яҙам шиғырҙарҙы —
Һәр бер һалмам-шиғыр — хаҡ йәймә.
Дуҫым булһаң, һалма өлгөргәндә
Йөрәгемә килеп ат бәйлә.

## АЙ-БАТМУС

Өтөлөп тә ҡырылып, ҡырҡ эш табып,
Ҡыҙ ҡушырға йөрөй еңгәмдәр.
Төрлө ҡыҙыҡ уйлап табалар ҙа,
Уйҙарында уйын, мең ғәмдәр.

Ҡейәү ҡоймағын да ҡойған улар,
Түшәк түшәй, ҡылып мәрәкә.
Был йәнемдең шомланыуын ҡыуып,
Ҡәйеф һирпеү микән йөрәккә.

Ялтлап торған еҙ батмусын — айҙы
Ашъяулыҡҡа ҡуйып ҡышҡы төн,
Серле генә сәй әҙерләп йөрөй —
Тынлыҡ боҙоп сыҡты серле өн...

Иҙрәне лә китте шунда донъя
Ҡәрәҙенән бәреп бал сыға.
Тын тыңларға килгән еңгәм тышта
Өн ишетер өсөн талсыға.

Ай тәбрикләй, еңгәйҙәрем тышта —
Һөйләшкәндәре лә ап-асыҡ.
Ҡайһыһылыр ҡолап төштө, ана,
Йолҡоп алып тәҙрә ҡапҡасын.

## ТӘҮГЕ МУНСА

Изгелекме, әллә этлек микән,
Еңгәмдәрҙең бөтә ҡылғаны.
Уйыны ла, ысыны ла шунда—
Этлек, изгелеге, булғаны.



Ҡейәү мунсаһы ни, һай, шау тамуҡ,
Шаулап ята имән ҡуҙҙары.
Ҡуҙҙар нимә, ялан тәпәй баҫам,
Уттан ҡыҙыу йәрем күҙҙәре!

Йола үтәп мунса инеп сыҡтыҡ,
Ай күргәнде ҡояш ялманы.
Донъяларҙа оялыуҙан яндым,
Бешәләндем, йәнем ҡалманы.

Тәүге мунса икән, һай, шау тамуҡ,
Шаулап ята имән ҡуҙҙары.
Ғүмер буйы янырға ла әҙер,
Йәнгә дауа йәрем күҙҙәре,
Һөйгәнемдең зәңгәр күҙҙәре.

## АҠ АЛЪЯПҠЫС

Аҡ алъяпҡыс быуҙы бейем,
Ап-аҡ алъяпҡыс.
Йөрәгемдән шатлыҡ таша
Тамам алъятҡыс.

Аҡ алъяпҡыс быуҙы бейем,
Ҡилен, ныҡ бәйлә.
Тормош юлың булһын тине,
Аҡтан-аҡ йәймә.

Аҡ алъяпҡыс — йорттоң күрке,
Торһон биләндә,
Сисһәң дә сис тапшырырға,
Ҡилер киленгә.

Аҡ алъяпҡыс быуҙы бейем,
Ап-аҡ алъяпҡыс.
Йөрәгемдән һөйөү таша,
Тамам алъятҡыс.

## АПАЙҘАРЫМ

Бөртөк, бөртөк апайҙарым,
Бер төк, бер төк.
Һағынып барам, йәштәремде
Һөртөп, һөртөп.

Һәр береһе йәнгә ғәзиз —
Әсәй кеүек.
Ныҡлап баҡһаң әсәй һаман
Йәшәй кеүек.

Биш мөйөшө бер йондоҙҙоң —
Биш бөртөкбөҙ.
Осрашабыҙ, айырылышабыҙ,
Йәш һөртөп беҙ.

## ӨЛӘСӘЙГӘ УРЫН ӨЙ ТҮРЕНӘН

Ғаилә теүәллеген теләп, балам
Донъя йыйып йөрөй күҙемсә.
Арыуыраҡ бүләк, — тик атайға,
Тәмлерәге аштың — үҙенсә.

Ҡурсаҡтарын алдан тыйып ҡуя,
Бүлмәләрҙе йүгереп йыйып ҡуя,
«Эштән ҡайта атай хәҙер», — ти,
«Ҡиске ашҡа өҫтәл әҙер», — ти.

Бөтөрөлөп йөрөй бер өлгөр йән,
Барыһына нисек ул өлгөргән!
Мендәр ҡабарта ул, эй күр генәм!
Өләсәйгә урын өй түренән!



## ЭХ, ДОНЪЯЛАР

Аш бешерҙем, сүп сығарҙым,
Һыу индерҙем ейәнде.
Йоҡо тыныс булһын өсөн
Йыуып сыҡтым иҙәнде.
Иртән торам, мәгәзингә,
Һөткә сығып йүгерәм.
Мин бит бисә, шуға күрә
Барыһына өлгөрәм.
Эшкә барып, кис ҡайтҡанда
Аҙыҡ-түлек күтәрәм.
Сирләп торам, сирләһәм дә
Аяҡ-өҫтө үткәрәм.
Ҡайһы ваҡыт ир затынан
Ҡуям шундай көнләшеп.
«Хоҙай нинә ир итмәгән?»
Ҡуям күккә өндәшеп.
Диванымда баш аҫтыма
Ике мендәр ҡыҫтырып,
Ятыр инем, телевизор
Һөйләр ине ҡысҡырып.
Ят тауышты ишетмәҫкә
Наушник кейер инем.
Ашарға саҡырһа ҡатын,
«Бында бир»— тиер инем.
Иргә бисә алып бирер
Хәлдәргә килеп етәм.
Асыуымдан иремде лә,
Хөкүмәтте лә һүтәм.
Оло бисә булып ҡына
Түрҙә ултырыр инем,
Әмерҙәрҙе көндәштәргә
Гел биреп торор инем.
Өстө түгел, биш бисәне
Алһын — донъя тармы ни?!

Тик биш бисәне тоторлоҡ
Ирҙәр беҙҙә бармы ни?!
Эх, донъялар...

## УҢҒАН ИКМӘК ТОРҺОН ӨҪТӘЛЕМДӘ

Хәстәрлекле әсәй иҫкә төшә,
Унан күреп мин дә төн бесәм.
Бар хәстәрем бисәлеккә бәйле,
Арытып та йыға һуң кисәм.

Ҡәҙерлерәк аш-һыу һаҡлап ҡуям,
Килеп төшөр ҡапыл ят ҡунаҡ.
Эҫе бите йөҙөм ҡыҙартмаһын,
Кешеһеҙлек йәнгә ят һымаҡ.

Әсәй кеүек көлгә ҡуҙҙар күмәм,
Килеп керер күршем, ут һорап.
Утһыҙ күрше — ағас кеше инде, —
Ҡабат кермәҫ бер ҙә ҡот юрап.

Төн йөҙөндә дуҫтар килеп керер,
Ете төндә сыра яндырам.
Уңған икмәк торһон өҫтәлемдә,
Ашъяулыҡҡа төрөп ҡалдырам.

## КИСӘ КӨЛДӨМ

Кисә көлдөм, иҫтән яҙып көлдөм,
Ерле-юҡтан көлдөм ҡыҙ кеүек.
Ә бөгөнөм, түгелеп иланым мин,
Йөрәккенәйемде саж телеп.



Ҡатын уртаһына оҡшамаған
Ҡылыҡ өсөн микән был яза?
Көлөргә лә хәҙер ярамай шул,
Йәндәрендә булғас гел ыҙа.

Эйгән башты күтәрмәҫкә тигән
Тәбиғәттең юҡ ул законы.
Заман ҡомон ҡойған был дәүерҙә
Ҡан ҡойҙора аҡыл ҡануны.
Көлөргә лә хәҙер ярамай шул.

## ТӘСБИХ ИТЕП ТАРТАМ

Шишәмбе көн юлға сыға күрмә,
Юлың уңмаҫ, балам!
Ҡобаһырғаҡ дуҫтан һаҡлана күр,
Ул дуҫ булмаҫ, балам.

Икенде лә аҡшам араһында
Эш башлама, балам.
Тоҙ ейҙерһә кеше, тәңре ише
Һин ташлама, балам.

Баҙ ҡаҙыма кешеләрҙең бер үк
Изге хыялына.
Йөрәк пәрҙәләрен ярыр һүҙҙе
Әйтмә ҡолағына.

Баға килгән яуға ғәйрәт тупла,
Ерле юҡтан ҡурҡма.
Эйелгәнде кисерә лә бел һин,
Берүк өҙә һуҡма.

Кем олоһо юлын киҫеп үтмә,
Кеселеклек һаҡла.

Яһиллыҡтан һаҡлан, эҫе биткә
Берүк ҡара яҡма.

Әсәкәйем! Ошо һүҙҙәреңде
Тәсбих итеп тартам.
Тарта-тарта изге тәсбих, тиҫбе
Тормош юлын артам.

## БАШҠОРТ БЕЙЕҮЕ

Эй, башҡорттоң төйөп бейеүҙәре!
Йәйләүҙәрҙә тайҙар тулауы!
Ойоп китеүҙәре, күҙ һирпеүҙәр,
Күлдәремдә аҡҡош һыулауы.

Индәренән бөркөт осоп китә,
Ғәйрәт ташып тора күкрәктән.
Дала моңо, даға сыңы булып —
Ярһый бейеү бөтә йөрәктән!

* * *

Был тәбиғәт һис тә айырылмай
Йәш балаһын ҡосҡан әсәнән.
Һөт еҫтәрен бөркә алмағастар,
Бәпес еҫе килә сәскәнән.

* * *

Яҙҙы көтөп тирәктәрҙә бөрө
Сыланған да дымға туйынған.
Мосолмандармы ни, әрәпә кис
Бар тирәктәр ғөсөл ҡойонған.



«Изгелеккә фатиха» — тигәндәй,
Аҙан әйтәме ни сыйырсыҡ.
Ә иртәһен, ҡояш ҡалҡҡан саҡта,
Хистәреңде нисек тыйырһың.
Бына-бына байрам ҡотлағандай,
Бала-саға йырыр йырғанаҡ.
Был донъяла йәшәү үҙе шатлыҡ,
Ҡеше ғүмере моңло йыр һымаҡ.

## МИҺЫРБАНЛЫҠ ҺОРАЙ

«Бисмилла» тип һуҡҡан яңы йылдың
Изге минут, изге сәғәтендә,
Ҡешеләрҙең ниңә ҡалды икән
Ыршыларҙы киҫеү ғәҙәтендә?

...Ҡисермәҫ тә инде кешеләрҙе —
Һалҡын ҡыштар буйы шыңшыны.
Яҙҙа донъя япраҡ ярған саҡта
Ярты кәүҙәһе юҡ ыршының.

Йәшәргәндә донъя, һандуғастар
Олонона баҫып һайраманы.
Сулаҡ ҡулдай тороп ҡалған олон
Йәшәреп тә быйыл ҡараманы.

Ҡоштар һайрар буйы — ярым кәүҙә,
«Тыныс үтмә,— тиме ни, — уҙып».
Башын һалған, үткенсенән, гүйә,
Миһырбанлыҡ һорай ҡул һуҙып.

## ЕЛБЕРҘӘП КИЛӘМ, ҺАНТЫЙ

Тағы, ана, яҙҙар килә,
Ҡуш ҡайындар серләшә.

Бөрө бүртә, күгәрсендәр
Гөлдөр-гөлдөр гөрләшә.

Муртайған ҡарҙарҙы ярып,
Гөрләүектәр серләшә.
Ҡояшты әйт, ихласланып,
Алтын нурҙар өләшә.

Ос(о)раһа бала-саға,
«Инәй» тиеп өндәшә.
Ә күңелем йылға кискән
Ҡыҙ-ҡырҡындан көнләшә.

Яҙҙар етһә, сабыйланам:
Ҡеше көлөр ҡылыҡтан.
Аяғыма һыу үткәреп,
Йылға кисәм тубыҡтан.

Йөрәккәйем «Ҡоштай ос, — ти,
— Ут бул да дөрлә, ян», — ти.
Баш бирмәҫ йәшлек еленән
Елберҙәп киләм, һантый.

## ҺАРЫ ҠОЙОН

Тел керешен ҡырҡыр йоҡа ғына
Ҡөмөш тәңкә төҫлө япраҡтар
Лебер-лебер килә олононда,
Ҡайын тәне үҙе ап-аҡтан.

Сәсмәү таҡҡан төҫлө аҫылынып
Төшкән япраҡтарҙа алҡалар.
Аһ, гүзәллек, илаһилыҡ ниндәй,
Ерҙән ҡалҡа ваҡ-ваҡ сауҡалар.



Мөхәббәткә баштан-аяҡ сумған,
Ғашиҡ төҫлө яҙ ҙа йәшәрә.
Ҡөҙөн көйә, ут-һарыһы ялмап,
Тәҡәттәре ҡалмай йәшәргә.

Ҡайынҡайым, һин йәшнәрһең әле,
Яҙҙар еткәс тағы еремә.
Бер ғүмер ҙә етмәй шағирҙарға —
Ә икәүһе кемгә бирелә?!

## САҠ ТАМАН

Бик белдекле ҡартлас кеүек, ҡарға
Һәлмәк баҫып йөрөй юл буйлап.
Сыйырсыҡтар күптән килгәндәр ҙә
Шатланалар кеүек өй туйлап.
Тәбиғәткә үпкә белдергәндәй,
Уямырҙа уйылып ҡар ҡалған.
Ташҡын яғалауға бирешмәйсә
Ирҙәр кеүек, баҫып яр ҡалған.
Ҡара камзул, бәрхәт таҡыяла
Әллә кемдәй оса һайыҫҡан.
...Абайлап та баҡһам, Иҙелемдең
Ҡөмөш һыуҡайҙары һайыҡҡан.
«Аҙ ғүмерҙә күкрәп ҡал» тигәндәй
Умырзая балҡый битләүҙә.
«Ашығып йәшәһәң дә саҡ таман» тип
Ҡүҙен йома гөлдәр кисләүгә.

## ҠАЙЫН СУҒЫ — БӘПЕС БАРМАҠТАРЫ

Япраҡ ярҙырыр ел, әсәме ни,
Сабырлығын юйған тулғаҡтан.
Сихри һулыш өрөп ағастарға,
Ҡүпме ағастарҙы уятҡан.

Ҡайын суғы — бәпес бармаҡтары —
Йомшаҡ елкәй үбә иркәләп.
Сихри донъя, эй мөғжизә бөгөн,
Ҡояш ҡалҡа һәр көн иртәләп.

Ер йәшәрә, йән йәшәрәме ни!
Яҙ байрамы— йәшлек байрамы.
Именлеккә оран биргән төҫлө
Йәшеллектә ҡоштар һайраны.

## АҠСАРЛАҠТАЙ КҮККӘ СӨЙӨЛӘМ

Яҙ килә, яҙ, минең көткән яҙым,
Утыҙынсы яҙым, ярһыуым.
Ун етеләгеләй шыйтыҡ яҙым,
Ун етеләгеләй балҡыуым.

Талдар, ана, көмөш бөрө ярған,
Тамсылар һыу түгел, нур ғына.
Боҙҙар ярып сыҡҡан ташҡынмы ни,
Йөрәгемдән һөйөү урғыла.

Утыҙынсы яҙым, иң аҡыллы яҙым,
Ярһыуҙарҙың йәмен тойҙорған,
Күңелемә ысын мөхәббәтте
Онотолмаҫлыҡ итеп уйҙырған.

Күңел тулы шатлыҡ— аҡсарлаҡтай,
Тулҡындарға төшөп һөйәләм.
Зәңгәр күккә, диңгеҙ тулҡынынан
Ярһыу ҡарпып, ҡабат сөйөләм.



* * *

Бар тәбиғәт, күрсе, сәскә атҡан,
Донъя матурлана, күҙемсә.
Сирендәргә баҫып, ҡоштар һайрай,
Һағыныуҙарын түгеп үҙенсә.

Сәскә атҡан һайын күперәп тора,
Хуш еҫтәрен бөркөп, сирендәр.
Әйтерһең дә, үпкән генә һайын
Матурлана алһыу ирендәр.

## ТОПОЛЬ ТҮЛ ТӨЙНӘГӘНДӘ

Ҡысындырып бит-йөҙөмдө
(Әйтерһең дә бик таныһыҡ),
Еүеш һайлап ҡына ҡуна
Тирәк осорған мамыҡ.
Фашлап бөтә тирә-йүнгә
Тополь түлен тултыра.
Йәшел япраҡ араһынан
Ҡар бураны туҙҙыра.
Эй өйөрөлөп мамыҡ оса,
Хәмәл буранымы ни?
Ап-аҡ итеп өҫтө-башты
Ҡарға уранымы ни!

* * *

Ҡәкүккәйҙәр өҙөлөп саҡырған саҡ,
Күңел һыҙылып моңға тулған саҡ.
Йәм-йәшеллек! Ошо гүзәл донъя
Минән дә бит тороп ҡаласаҡ.

Төшөп кенә батып үлеп булмай
«Ҡаспий» тигән генә күлдәргә.
Ризыҡ тарҡатһа ла, әҙәм башын
Тупраҡ йыя тыуған ерҙәргә.

Атам-әсәм аяҡ осҡайында
Ҡөтөп ята төҫлө бүлемен.
Ҡайтып ауһам тыуған еркәйемә,
Еңел булыр төҫлө үлемем.

## КӘКҮГЕМ, ҠОШСОҒОМ

Ҡәкүгем, һиңә әйтәм,
Һанама гел бирҙе.
Һанамай һыҙлатма,
Барлы-юҡ ғүмерҙе.

Ҡәкүгем, ҡошсоғом,
Ҡемгәлер — күп ғүмер,
Ҡемгәлер — теләп тә
Донъяла юҡ ғүмер.

Әйт әле һин миңә,
Ҡәкүгем, ҡошсоғом,
Йәшәп тә бөттөммө
Ғүмерҙең остоғон?

## ҺЫУ КҮТӘРЕП КИЛӘ ҠОЙОНАН

Эй, сабый йән! Сабый хыял менән
Ҡалын болоттарҙы туҙҙырып,
Йондоҙҙарға осоп сығып киттем
Әкиәт балаҫына ултырып



Яу аттары, Һары ат менән Буҙ ат,
Бәйле тороп тимер ҡаҙыҡта,
Сапҡын өсөн әҙер генә улар,
«Сапҡын аты» тиҙәр халыҡта.
Арҡысағым ике ҡулын һуҙып,
Ҡосаҡларға килә ҡаршыма.
Ем-ем итеп өлкәр йондоҙ ҡалҡҡан,
Инде оҡшаш йөҙөк ҡашына.
Етегән сүмес ҡымыҙ һоҫоп бирҙе,
Ай-кейәүҙең хозур туйынан.
Зөһрә һылыу килен булып төшөп,
Һыу күтәреп килә ҡойонан!
Эй, сабый йән! Хыялыйҙар итеп,
Ерем шулай күккә олғашҡан.
Ерҙә, күктә сиктәр юҡтыр кеүек,
Ерем менән күгем тоташҡан.
Еркәйемдә минең был хозурлыҡ,
Йондоҙ иле — ерем тоташҡан.

## ЯУМАЙ УҘҘЫ

Елләне лә яумай уҙҙы ямғыр,
Ергенәйем сарсап дым көтә.
Күҙҙәремдән таммай кипкән йәштән
Керпектәрҙе ялҡын, ут өтә.

Хыялдарым морон сиртә алмай,
Йәндәрем дә тулай зар илап.
Бөркөт төҫлө, ергә ҡаяларҙан,
Әрнеүҙәрҙән төшәм гел ҡолап.

Елләне лә яумай уҙҙы ямғыр,
Яуманы ла еле тымғас та.
Леп-леп килеп бәхилләшкән төҫлө,
Һулып кибә япраҡ ағаста.

## БЕСӘН ӨҪТӨ

Бесән еткән, буйы билгә һирпкән,
Йырып ҡына сығыр әмәл юҡ.
Иҫ китерлек туғай табынында
Ал биләмәй сыҙар әмәл юҡ.

Йәшлек дәрте менән салғы тапай
Сәсән телле ҡарттар түшлектә.
Егеттәргә ҡыҙҙар сәскә йыя,
Ә егеттәр еләк—төшләккә.

Һуштарыңды һинең һурып алыр
Сәскәләрҙе генә йыйырмын.
Тик уларҙы бүләк иткән саҡта
Хистәремде нисек тыйырмын?

Елкенеүҙән елһеп сабып киттем,
Бакуй буйлап ҡасты бытбылдыҡ.
Ҡөҙгө төҫлө салғы битен һыйпап,
Еләк килеп ятты: «Суҡ булдыҡ!»

Батмандан бал ҡайырғандай тоям—
Бер һелтәүең — оло күтәрем.
Ләззәтләнәм әрем әсеһенә,
Ҡымыҙ эсәмме ни күтәреп!

## САМА ҠАЙҘА

Бер өҙлөкһөҙ ямғыр яуа,
Бөтә донъя һоро төҫтә.
Шарлап аға ямғыр һыуы,
Түгеп яуа һаман өҫкә.



Асфальт тулы сеүәсендәр...
Сүпләмәйҙәр ҡошҡайҙар ҙа.
Мөгөҙҙәрен дә йәшермәй
Хатта ҡурҡаҡ ҡусҡарҙар ҙа.

Эх! Йәшәрә тос яҫмалар...
Был йәшеллек нигә файҙа?
Бәйеле аҙған был яуындың
Яуыуында сама ҡайҙа?

Туҡтатырға бер сара юҡ —
Игенсенән һанһыҙ оят!
Ҡан тамыҙып йөрәк һыҙлай:
Сабырлыҡ та күңелгә ят,
Сама ҡайҙа? Сара ҡайҙа?

* * *

Тырпайтҡан да әнә бармаҡтарын,
Тубырсығын әлеп иң-иң үргә,
Мыҡты баҫып тора көҙҙә шыршы,
Яндарыма яҡын, ти, һин килмә.

Иҫһеҙ елдәр, тубырсыҡтарымды
Ел осорор, тиеп көйөнмә.
Яңы йылда күстәнәсем булыр,
Һаҡлап торам әле тейенгә.

## ТӘҮГЕ ҠАРҘАР НУРЫ

Күҙҙе асып ҡарап булмай
Был донъяма, күҙ ҡамаша.
Әллә донъя үҙе миңә
Ҡылды микән бер тамаша?

Имандәрҙе кейендергән
Ынйылы боҙ-бәлләүерҙән.
Йәйғор донъям, китеп барам
Әллә күктән, әллә ерҙән!

Күҙҙе асып ҡарап булмай,
Саф ҡарҙарға күҙ ҡамаша.
Ҡояш үҙе төшөп сумған
Аҡ ҡарҙарға, вәт тамаша!

## АҠ ТӘҢКӘЛӘР

Тәңкә-тәңкә ҡарҙар яуа,
Ап-аҡ тәңкәләр.
Биткә ҡуна, өҫкә ҡуна,
Бик һаҡ тәңкәләр.

Ап-аҡ, ап-аҡ ҡарҙар яуа,
Йондоҙ тәңкәләр.
Тәңкә сыңы аҡ донъяға
Таҡмаҡ әйтәләр.

Ел уйнаған ҡурай моңға
Бейей тәңкәләр.
Аҡ йондоҙҙар сыңлай-сыңлай,
Һөйөү сәсәләр.

Аҡ тәңкәләр, аҡ тәңкәләр,
Ҡышҡы тәңкәләр.
Аҡ тәңкәләр аҡ донъяға
Һөйөү сәсәләр.



## ҠУБЫР ИНДЕ ХӘМӘЛ БУРАНЫ

Төптө юҡҡа яҙҙар етмәҫ инде,
Хәмәл бурандары бер ҡупмай...
Уйҙар буранында йөрәккенәм,
Бер һуға ла килеп, биш туҡтай.

Хәмәл бураны ла ҡубыр инде,
Ябалаҡлап тороп ҡар яуа.
Ап-аҡ донъя, әйтерһең дә, бергә
Борсаланғанмы ни ер, һауа!

Донъяһы ла артыҡ буталанған —
«Хан башҡынайына бей етә».
Ҡар башына ҡар етһә ни, етһен,
Аҙағынан ерем яҙ көтә.

Күңелем дә минең әлән-йөлән,
Үрһәләнәм яҙҙы көтөүҙән.
Буталанған донъя яйланһасы
Хан башына бейҙәр етеүҙән.

Төптө юҡҡа яҙҙар етмәҫ инде,
Хәмәл бурандары бер ҡупмай...
Уйҙар буранында йөрәккенәм,
Бер һуға ла килеп, биш туҡтай.

## ЭЙ, МӨХӘББӘТ!..

Эй, мөхәббәт, һиңә табынып мин —
Ҡанаттарым көйгән күбәләк.
Иркәм иҫкә төшһә, иҫем китә,
Иҫем инһә, төшәм сүгәләп.

Эй, мөхәббәт, һинең утта янып,
Ут-ялҡыны һүнһә ғүмерҙең,
Ергә атылып төшкән йондоҙ төҫлө,
Алдарыңа төшөп һүнермен.

## СӘСКӘ АТАМ

Һиндә генә бит ул яңы тыуған
Болан балаһының күҙҙәре,
Һиндә генә бит ул һағышымдың
Дауа итеп көткән һүҙҙәре!

Һинең генә сәсең тулҡынынан
Устарыма һөҙәм бәхетте.
Һин бар саҡта — һәр саҡ юлым еңел,
Ғазаптарҙан табам рәхәтте.

Бер мөғжизә тыуып ҡуйыр төҫлө
Беләгемдән тотҡан мәлеңдә.
Ун етемә йүгереп ҡайтып кире,
Сәскә атам ошо хәлемдә.

## МИЛӘШ — КӘЛӘШ, УТ — ЯЛҠЫН

Р. Ғариповтан

Миләш-кәләш һылыуланып,
Һөйгәнен көткән мәле.
Йөрәгенә һыймай һөйөү
Бар тәнен өткән мәле.
Үҙ усыңа ғына йомма
Тик бирәүгә һөйөүең.



Баҙрап бешкән миләш көтә
«Һине һөйәм» тиеүең.
Баҫымсаҡ та көҙ түгел был,
Түгел хәмәл бураны.
Ойотоп ҡар бөртөктәрен
Моңһоу күк ҡар бураны.
Бил тибәренән ҡар кисәм
Һағышлы ҡайғы эсеп.
Бындай ҡайғы ҡай арала
Ҡилеп өлгөргән күсеп?!
Ҡайғы кисеп сыға алмам,
Ҡиттем ҡоласлап йөҙөп.
Тәлгәшеңдең бер бөртөгөн
Тәмләп өлгөрҙөм өҙөп...
Бөртөк миләш күҙҙәремдән
Тәгәрәтә ут-ҡуҙҙы.
Ҡүҙ йәнштәрем — ҡуҙ тәлгәше
Йөрәгемә ут һурҙым.
Йөрәктә миләш ялҡыны,
Биттәр яна һалҡындан.
Ҡар тәңкәлә күҙ йәш күрәм,
Миләш, һинең ялҡындан.
Тамылйып бешкән миләштән
Селлә һыуығы һалҡын.
Яндырыуың селләләрҙә
Тик үҙ эсемдә ҡалһын.
Баҡыр күҙ йәш түкһә имән,
Ниндәй көс бар өркөтөр?
Эй, мөхәббәт, бер ялмаһа,
Ысын ирҙе үкһетер.
Баҫымсаҡ та көҙ түгел был,
Түгел хәмәл бураны.
Йәшкә мансып бар донъяны,
Хәмәлгә тапмай әмәлен
Февраль — ҡайғы бураны.

## ҠӘҘЕР КИСТӘРЕН КӨТӘМ

Тәгәрләгән алдарыңа,
Ҡүҙҙәреңә баҡҡан — мин.
Мөлдөрәмә ҡарашымды
Йөрәгеңә атҡан — мин!

Йөрәгеңдең нескә ҡылын
Ҡарашым менән сиртәм.
Яҙмышымды нурлап балҡыр
Ҡәҙер кистәрен көтәм.

## ЕЛӘК — БҮЛӘК

Мөхәббәттең серле сатырында
Толомдарым һүтһәм — сымылдыҡ.
Көндөҙ ҡояш, төнөн айым булып,
Шул сымылдыҡҡа һин инеп сыҡ.

Онотолоп китеп ҡулың наҙлар,
Тәнем буйлап күсер иренең.
Түшемдәге ике бөртөк еләк
Һәр төн бүләк, тиеп иреңмен.

Һуштан яҙып ләззәт-рәхәтлеккә
Өтөлөрһөң, йәнем, бешерһең.
Һулыш менән һулыш сыуалыуҙан,
Ялҡындарҙан ауып төшөрһөң.

Онотол да тағы наҙла әле,
Түш-еләктә килеш иренең.
Инде үҙем, һуштарымдан яҙып,
Еләк — бүләк тиеп иреймен.



## ЙӘН НУРЫМ

Яҙҙа ғына түгел, ҡара күҙҙә
Балҡый икән йондоҙ тигәнең.
Һайлап ҡына алған йондоҙ икән
Йәнгә яҡын итеп һөйгәнең.

Балҡып ҡына яна ҡараңғыла
Минең йондоҙ, минең йән нурым.
Бөтә донъям, бар йыһаным балҡый,
Минең йондоҙ һипкәс йәм, нурын.

## КҮҘ АЛМАМ

Һағынаһыңмы, тимә һин,
Һағынмаған ҡайҙа ул!
Күҙ алмамда һының балҡый,
Табынмаған ҡайҙа ул!

Һуҙып һулыш алғанымда,
Һурып алам күҙ алмам.
Күҙ алмамдан һин юғалма,
Һинһеҙ, йәнем, түҙә алмам.

## ЯҢҒЫҘЛЫҠҠА ДУСАР ИТЕП ҠУЙМА

Күкрәк пәрҙәм булып һағыш баҫа,
Ҡанһыратып йөрәк башҡайым.
Минең сабыр түҙгән һағышыма
Үрһәләнеп ҡуя ҡуш ҡайын.

Үрһәләнеп, өҙгәләнеп китеп,
Йондоҙҙарға бағам кистәрен.
Йондоҙ теҙеп көткән кистәремдә
Килмәй ҡалһаң ғына ни эшләрмен?

Аҙашмаҫҡа ай балҡытып ҡуям,
Сабыр һағыш һибәм юлыңа.
Яңғыҙлыҡҡа дусар итеп ҡуйма,
Ысыҡ-йәштәр һөҙәм ҡулыма,
Сабырлыҡты теҙәм юлыңа.

### ҺАҒЫНЫУ ЯЛҠЫНДАРЫ

Һепертмә буран һепертә
Тап-таҡыр асфальт битен.
Ҡейемдән үтеп ингән ел
Өшөтә йөрәк итен.

Ҡайтырыңды көтөп торам,
Ҡайтһаң кермәйһеңме инде?
Өҙөлөп һине көткәнде
Үҙең белмәйһеңме инде?

Тышта селлә, йөрәгемдә
Һағыныу ялҡындары.
Йөрәгемә үтмәһен тик
Янғыҙлыҡ һалҡындары.

* * *

Өшәндереп һалҡын үтә
Ел үтмәҫ араларҙан.
Йөрәктән ҡан тама, һарҡып,
Һин һалған яраларҙан.
Китәһең дә юғалаһың
Күҙемдең ҡараһынан.
Тағы эҙләп ҡайттым һине
Ҡайындар араһынан.



### ҺАҒЫШ

Һағыштарымды түгергә
Сыҡһам таң үҙәгендә,
Һандуғаскай үҙе өҙөлөп
Түгелә тирәгендә.
Ҡайындарға һөйәлгәйнем —
Һап-һары булды ҡайын.
Һандуғас та телһеҙ ҡалды —
Ҡисер, һандуғасҡайым!
Үҙемдән һағышлы ҡошҡа
Серемде һөйләмәнем.
Йә йөрәге ярылыр, тип,
Борсорға теләмәнем.

### САБЫРҘАР ИТӘМ ӘЛЕ

Йөҙҙәремә һары сыҡты,
Һағынғанғалыр инде.
Алтын һары сәстәреңә
Ҡағылғанғалыр инде.

Әфлисун өҙөр инем,
Бауҙарға теҙер инем.
Һағынмаһам, һарғайыуға
Сабырҙар түҙәр инем.

Һағынаһыңмы, тимәгеҙ,
Һағынмаған ти ҡайҙа?
Әфлисун һарыһы сыҡты,
Сабырҙарҙан ни файҙа?!

## НИҢӘ ҺЫЙМАЙЫМ!

Күтәреп тә генә һин баҫтырған
Аҡ мендәрҙе өҙөлөп һағынам.
Уйҙарымда мендәр өҫтәренә
Ҡилен булып төшәм яғынан.

Уйлайым да түгелеп илайым мин,
Һине һағыныуҙан илайым.
Ғүмер тигән нәмә туҡтатҡыһыҙ,
Яңғыҙлыҡтан илап — тулайым.

Һине күрһәм, һаман илайым мин,
Һин юҡ саҡта бигерәк илайым.
Хыянатың менән мөхәббәттең
Араһына ниңә һыймайым?!

## ҒОРУР ҠАЛЫРМЫН

Йөрәгемде бирмәм «ал инде» тип,
Юлдарыңа сыҡмам «ҡал инде» тип,
Ҡуштау биләнендә янырмын.
Үлгәндә лә, янып һүнгәндә лә
Юлдарыңа тик нур һалырмын,
Йөрәктауҙай ғорур ҡалырмын.

## ҮЗБӘК ЕГЕТЕ

Ҡап-ҡара күмерҙе
Тоҡанып туҙ итеп,
Сөм-ҡара күҙҙәрен
Теп-тере ҡуҙ итеп,

Шашлыҡтар бешерә
Бер үзбәк егете.



Сәстәре — беҙҙәге
Тап ҡайын дегете.

Йыш ҡына күҙәтә
Ул алтын сәғәтен.
Бешермә шашлыҡтар —
Юғалды тәҡәтем.

Сәғәттән күҙҙәре
Гел миңә һирпелә.
Сөм-ҡара ҡуҙ-уттан
Йөрәгем елкенә.

— Алығыҙ, ҡунаҡтар,
Шашлыҡтар кәрәкме?
Әллә, — ти, — шашлыҡтай
Һыҙылған йөрәкме?

## ЯРАТЫУ ЕҢЕЛ ТҮГЕЛ

Уяна ла яҙҙа хатта
Бөрө тиртә таллыҡта.
Күр, күгәрсен, ярһып-шашып,
Яҙғы һыуҙы танһыҡлай.

Остолар... парлап ҡундылар,
Ҡыйыҡ аҫты, һыулыҡҡа.
Әй, бар донъя, күр ҙә һоҡлан
Ошондай ҡыйыулыҡҡа.

Һуштан яҙып үбешәләр,
Шаҡ ҡатырып донъяны!
Ошо оло бөйөклөктө
Ғәйепләп тә буламы?!

Бысыранған тәпәй, йөндәр,
Саф ҡала ике күңел.
Мөхәббәт ул еңел килмәй —
Яратыу еңел түгел.

Көндәр тағы тоташтырыр
Һыу, үлән араларын.
Оянан тәгәрәп осор
Күгәрсен балалары.

## ТӘҢРЕМӘ БАҒАМ

Әйтсе, бәхет, нимә төҫөндә һин,
Ал йәйғормо әллә төҫөндә?
Йәшлек кеүек йәшел яланмы һин,
Йәшәргәндә ерем өҫтөндә?

Әллә, тимен, анау йондоҙҙармы,
Күккә ашҡан сағы күңелдең?
Йәрем ҡуйыныңың йылыһымы —
Наҙҙарына сумдым, күмелдем.

Әллә, тимен, бәпесләгән сағым,
Ҡурҡыу-һөйөнөүҙәр ләззәте!
Аҙаҡ берҙе биштәй һөйләүҙәрем —
Бисәләрҙең холҡо-ғәҙәте.

Ауыр саҡта йүгереп килеп еткән
Дуҫтар төҫөндәме һин, бәхет?
Туғандарҙың хафаларын беләр
Биләү эсендәме һин, бәхет?

«Ил һау булһа, малды табырбыҙ», — тип
Йырланған йырҙамы көс-кәрең?
Имен донъя, һәр тәңремә бағам,
Һәр берендә бәхет төҫтәре.



## ПОЕЗДА БАРҒАНДА

Купе һәндерәһе йәнәшәлә
Һөлөк кеүек егет йоҡлата.
Әле ҡартаймаған минең йөрәк
Тулай-тулай хистәр уйната.

Һәндерә аралары ҡул һуҙымы,
Таша йөрәк сихри хис менән.
Тик егетем миңә күҙ һалманы,
Боролоп уҡ ятты кис менән.

Ҡулым һуҙһам, бәхет көлөр төҫлө,
Рельс көйләп бара үҙ сазын.
Китер инде, поезд алып китер,
Йөрәгемдә ҡалыр бар наҙым.

Насип булмаҫ ергә баҫып булмаҫ,
Төнө буйы йәнем өшөнө.
Яҡын аралар ҙа, булмаҫ булһа,
Ҡауыштырмай икән кешене.

## ӨЙӨМ АУЛАҠ, МИН ИЛАҠ

Бер туйғансы илайымсы
Яңғыҙым: өйөм аулаҡ.
Бер яратҡан көй онотоп
Таба алмайым һымаҡ.

Тынғыһыҙлыҡ күңелемдә
Шаҡый ҙа шаҡый һаман.
Әллә ниҙәр булыр төҫлө
Был донъяма бер заман.

Ҡемде көтә һуң был күңел,
Ҡөй онотолған һымаҡ.
Тынғыһыҙлыҡ йәндә ҡыя,
Өйөм аулаҡ, мин илаҡ.

### МИН ХӘЙЕРСЕ

Мин хәйерсе, мин хәйерсе күптән,
Һыныҡ ҡына икмәк бирегеҙ.
Өҫтөмдә юҡ, алам-һалам ғына,
Ҡейем бирә алһа берегеҙ,
Ҡайғым булмаҫ ине был донъяла,
Йоҡлаһам да ситән буйында.
Ҡулдарымды өрөп йылытырмын,
Ҡайғым булмаҫ ине уйымда.
Ҡурайымды ғына һындырмағыҙ,
Далам нишләр таҡыя ҡурайһыҙ?
Йыр йырлатмай мине үҫтермәгеҙ,
Йырһыҙ ғүмер миңә ҡулайһыҙ.
Һағыштарҙан йөрәк азат булһа,
Һандуғастың моңон аңламам.
Мөхәббәттән йәнем мәхрүм ҡалһа,
Ваз кисермен бер көн алланан.
Мин хәйерсе, донъя буйлап киләм,
Алам-һалам кейгән диуана.
Мөхәббәтем — йылы донъям минең,
Йылы аҙыҡ, йырлап йыуанам.

* * *

Алһыу төҫтәр эҙләмәйем,
Беҙҙең йәштә төҫ түгел.
Аҫыл йәрҙәр күҙләмәйем,
Тәүге йәргә иш түгел.



Баштарымды услап алам,
Уйҙар уйлағанымда.
Утта ҡалды был башҡайым
Ғүмер урталарында.

### ЙЫЛ КИЛТЕРЕР БУЛАМ

Яңғыҙ кәкүк йыл килтермәй, тиҙәр
Һине саҡырып та үтә көндәр.
Һине эҙләп йәйем үтеп китһә,
Сығара алмам мин дә моңло өндәр.

Яңғыҙ үткән әрәм йылдарыма
Ҡабат ҡайтыр булам мең яңынан.
Яҙ килтерер яңғыҙ кәкүкмен мин
Һине саҡырыуҙан нык ярһыған.

Инде етте йәйҙең урталары,
Осҡанда ла осам, кү-кү-кук, тип.
Йылдарға тиң бер төнөмдә көтәм,
Ҡауышырға сара юҡ-юҡ-юҡ, тип.

### УТТАЙ ТӘНЕМ

Мин төшөмдә һине күрҙем әле,
Наҙҙарыңдан торҙом төшәнеп.
Йөрәк һыҙлай, йәшлегемде һиңә
Бүләк иткәнемә ышанып...

Төштә түгел, был ләззәтле тойғо
Ниңә бирмәнең һин өнөмдә?
Уттай тәнем, йәнем түл тулата,
Йән илатып сығам төнөмдә.

Таңда ҡыҙҙар киске уйындан ҡайта,
Ай оҙатып бара, түтәрәм.
Берсә салҡан, бер йөҙ түбән ятып,
Йәштәр түгеп төндө үткәрәм.

Ҡыҙҙар йырлай, нимә белеп йырлай?
«Ай төшкән, күтәр әле,
Һандуғастан үткән ғүмер
Беҙҙән дә үтәр әле!» —
Моңло йырлайҙар бит был ҡыҙҙар!
Уттан алып һыуға һалалар ҙа
Уйға ырғыталар, уйһыҙҙар!

Уй төптәре тәрән, таң алдында
Уй-хистәрҙе кемгә һөйләйем?
«Күңел бөтөнлөгө бир хоҙай», — тип
Был ҡыҙҙарға теләк теләйем.

Түл тулатып, түлдәр төйнәр мәлем,
Аҡламауың ҡалай аяныс!
Һандуғасҡайҙарҙан үткән ғүмер
Беҙҙә генә туҡтап ҡалмаҫ инде ул,
Ҡайҙа ышыҡ, ҡайҙа таяныс?!

## КЕМ ТЕРТЛӘТТЕ ҒОРУР ЙӨРӘГЕМДЕ!

Кемдер килеп арттан йыға һуҡты,
Күҙен йомһон, типтер, асмаҫҡа.
Ҡараңғыланды ла күҙ алдарым,
Тигеҙ ерҙә ауҙым асфальтҡа.

Дошман, дошман инде, аныҡ беләм,
Дошманынан ҡош та һаҡлана.
Дуҫтар араһында кем һуң дошман?
Дошманлығын әйтмәй ваҡлана,
Ҡуйынында таштар һаҡлана...



Ғүмер юлын үтәм, уйҙы һүтәм,
Йоҡоларҙан торам һиҫкәнеп.
Кем тертләтте ғорур йөрәгемде?
Дуҫтарға ла бағам шикләнеп,
Тик уйҙарға ғына бикләнеп.

## ЙӘЙҒОР КҮРҘЕМ

«Йәйғор күрҙем», — тиһәм йәйҙә,
Бер кемде лә ғәжәпләндермәҫ, тим.
Мөғжизәләр», — тинем, йәйғор төҫлө тиеп
Сал керетте сәскә. Мин сәсәйем йәшкә.
Ап-аҡ ҡарҙар туй күлдәге тегә,
Эй был сафлыҡ!
Күҙ-йәш булып эреп аҡмаҫ микән?
Сәскенәйҙәр бәйләнешеп кенә
Бөткәс сәскә...

# ЙӨКМӘТКЕҺЕ

## Поэмалар


Һандал . . . 6
Стәрле . . . 21
Ниҙер биреп бөтөрмәнең һымаҡ . . . 28
Тәүбәләргә ҡайттым . . . 31


## Шиғырҙар


«Дуҫың әйткән бер хаҡһыҙ һүҙ...» . . . 46
Башҡортостандың суверенитетын юллағанда . . . 46
Саҡырыуым яңы көрәшкә . . . 47
Зәңгәр йәшмәләргә таң ҡалып . . . 49
Арҡа һөйәгем һин, халҡым . . . 50
Адлер — Новосибирск, Новосибирск — Адлер . . . 52
Дебет шәлем . . . 53
Эйәрләйек атты, туғаным . . . 54
Күкбоҙ . . . 55
Миләш һиртмә . . . 56
Башаҡ . . . 56
Ҡайһы яҡтың башҡорто һин, һылыу? . . . 57
Ҡороп ебәрәйем тирмәләр . . . 58
Ҡаҙлайырым . . . 59
Ауылым Ҡунаҡбай . . . 60
Тын тыңлайым . . . 60
Ах, был донъя! . . . 62
Ҡабалана заман . . . 63
Йөрәк оса . . . 64
Аңламайым серен төҙөлөштөң . . . 65
Нимә һуң был? . . . 65
Эй был ғүмер... . . . 66
Ил иһәһе . . . 67
Тоҙаҡ . . . 67
Ҡулдарымдан ҡайсаҡ әйбер төшә . . . 68
«Бөтәһен дә бер ыңғайға...» . . . 68
Баҙар ҡайнай . . . 69
Уф, арыным, тиеп . . . 70
Арыным . . . 71
Эй халҡымдың изге ихласлығы! . . . 72
Еңгәләрем . . . 73
Еңеү яҙы . . . 73
Тыуған көнөм . . . 74
Йән өшөгәндә . . . 74
Рәсәйҙең яңы гербына . . . 75
Ах, Фирғәнә . . . 75
«Намыҫын да онотоп ҡуйып...» . . . 76
Йәшәгәс . . . 78
Килешә . . . 78
Өҙәңгелә — ирҙәр аяғы . . . 79
Йоҡо . . . 80
Бер ҡот килә . . . 80
Имән һыимаҫ тимә . . . 81
Абынмам мин . . . 82
Йән өшөнә . . . 82
Йыуатмағыҙ . . . 83
Яңғыҙ саҡта . . . 83
Башынан да үркәстәре бейек . . . 84
Бар шундай саҡ . . . 85
«Ҡағылып та, һуғылып та үстем...» . . . 85
Ихласлығым — зәңгәр күгемдәй . . . 86
Ҡыйын . . . 86
Хәтер . . . 87
«Һин егет» тиҙәр . . . 87
«Нәби малайы» . . . 87
Ярыш-ҡанат ингәремдә . . . 88
Мөхәррирҙәргә үпкә . . . 90
Ҡарауылда торғанда . . . 91
Власть . . . 91
Түрәләрҙең ҡабул итеү көнө . . . 92
«Ашҡаҙар» гәзитенә . . . 93
Һәр бер һүҙем ҡолата . . . 93
Илшат Йомағоловҡа . . . 94
Фарис Ғәлләмгә . . . 94
Рәми Ғарипов иҫтәлегенә . . . 95

Лермонтов эҙенән . . . . . . . . . . . 96
Лермонтов эҙҙәренән . . . . . . . . . . 96
Мин инанған йән . . . . . . . . . . . 97
Шиғри донъям . . . . . . . . . . . . 97
Ҡанат алған кеүек ҡоштарҙан . . . . . . . 98
Өйрәт әле, өләсәйем . . . . . . . . . . 98
«Бала» тигән балдан татлы заттың...» . . . . 99
Балаларҙың теле ҡыңғырау . . . . . . . 100
Эшләнә лә бөтә эштәрем . . . . . . . . 101
Буйға еткән ҡыҙым . . . . . . . . . . 101
Ҡына гөләм . . . . . . . . . . . . . 102
Була алмабыҙ барыбер диндәштәр . . . . . 103
Айбулатым . . . . . . . . . . . . . 104
Ейәнем . . . . . . . . . . . . . . 105
Көмөш таяҡ . . . . . . . . . . . . 105
Ҡорот әҙер . . . . . . . . . . . . 106
Һалма йәйәм . . . . . . . . . . . . 107
Ай-батмус . . . . . . . . . . . . . 108
Тәүге мунса . . . . . . . . . . . . 108
Аҡ алъяпҡыс . . . . . . . . . . . . 109
Апайҙарым . . . . . . . . . . . . . 110
Өләсәйгә урын өй түренән . . . . . . . 110
Эх, донъялар . . . . . . . . . . . . 111
Уңған икмәк торһон өҫтәлемдә . . . . . . 112
Ҡисә көлдөм . . . . . . . . . . . . 112
Тәсбих итеп тартам . . . . . . . . . . 113
Башҡорт бейеүе . . . . . . . . . . . 114
«Был тәбиғәт һис тә айырылмай...» . . . . . 114
«Яҙҙы көтөп тирәктәрҙә бөрө...» . . . . . 114
Миһырбанлыҡ һорай . . . . . . . . . . 115
Елберҙәп килә, һантый . . . . . . . . . 115
Һары ҡойон . . . . . . . . . . . . 116
Саҡ таман . . . . . . . . . . . . . 117
Ҡайын суғы — бәпес бармаҡтары . . . . . . 117
Аҡсарлаҡтай күккә сөйөләм . . . . . . . 118
«Бар тәбиғәт, күрсе, сәскә атҡан...» . . . . 119
Тополь түл төйнәгәндә . . . . . . . . . 119
«Ҡәкүккәйҙәр өҙөлөп саҡырған саҡ...» . . . 119
Ҡәкүгем, ҡошсоғом . . . . . . . . . . 120
Һыу күтәреп килә ҡойонан . . . . . . . . 120
Яумай уҙҙы . . . . . . . . . . . . 121
Бесән өҫтө . . . . . . . . . . . . 122
Сама ҡайҙа . . . . . . . . . . . . 122
«Тырпайтҡан да энә бармаҡтарын...» . . . . 123
Тәүге ҡарҙар нуры . . . . . . . . . . 123
Аҡ тәңкәләр . . . . . . . . . . . . 124
Ҡубыр инде хәмәл бураны . . . . . . . . 125
Эй, мөхәббәт!.. . . . . . . . . . . . 125
Сәскә атам . . . . . . . . . . . . 125
Миләш — кәләш, ут — ялҡын . . . . . . . 126
Ҡәҙер кистәрен көтәм . . . . . . . . . 126
Еләк — бүләк . . . . . . . . . . . . 128
Йән нурым . . . . . . . . . . . . . 128
Күҙ алмам . . . . . . . . . . . . . 129
Яңғыҙлыҡҡа дусар итеп ҡуйма . . . . . . 129
Һағыныу ялҡындары . . . . . . . . . . 129
«Өшәндереп һалҡын үтә...» . . . . . . . 130
Һағыш . . . . . . . . . . . . . . 130
Сабырҙар итәм әле . . . . . . . . . . 131
Ниңә һыймайым? . . . . . . . . . . . 131
Ғорур ҡалырмын . . . . . . . . . . . 132
Үзбәк егете . . . . . . . . . . . . 132
Яратыу еңел түгел . . . . . . . . . . 132
Тәңремә бағам . . . . . . . . . . . 133
Поезда барғанда . . . . . . . . . . . 134
Өйөм аулаҡ, мин илаҡ . . . . . . . . . 135
Мин хәйерсе . . . . . . . . . . . . 135
«Алһыу төҫтәр эҙләмәйем...» . . . . . . . 136
Йыл килтерер булам . . . . . . . . . . 136
Уттай тәнем . . . . . . . . . . . . 137
Кем тертләтте ғорур йөрәгемде? . . . . . . 137
Йәйғор күрҙем . . . . . . . . . . . . 138

**ЯНБЕРДИНА Зубаржат Набиевна**

**РОДОНАЧАЛЬНИЦА**

Поэмы, стихи

*(на башкирском языке)*

Редакция мөдире *С. Н. Шәрипов*
Мөхәррире *Лена Сирусина*. Рәссамы *Марсель Ҡәлимуллин*. Биҙәлеш мөхәррире *Мөхтәр Бейешов*. Техник мөхәррире *Надия Пятаева*. Ҡорректоры *Әлфиә Кәримова*

ИБ № 5176

Йыйырға бирелде 12.09.94. Баҫырға ҡул ҡуйылды 22.02.95. Ҡағыҙ форматы $70 \times 90^1/_{32}$. Тип. ҡағыҙы № 1. Әҙәби гарнитура. Ҡалҡыу ысул менән баҫылды. Шартлы баҫма таб. 5,26. Шартлы буяу отт. 5,41. Иҫәп-баҫма таб. 5,47. Тиражы 2500 дана.
Заказ № 801. Хаҡы ирекле.

Башҡортостан «Ҡитап» нәшриәте.
450001, Өфө, Левченко урамы, 4а.
Өфө полиграфия комбинаты. 450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.